***Почтальондар иғтибарына! Матбуғат баҫмаларының гәзит уҡыусыға бары тик почта хеҙмәткәрҙәре фиҙаҡәрлеге менән барып етеүен беләбеҙ, уларҙың хеҙмәтен юғары баһалайбыҙ. 2014 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барған әлеге мәлдә почтальондарға шундай тәҡдим: кем дә кем 50-80 дана "Киске Өфө"гә яҙҙыра, улар беҙҙең матур бүләктәргә (кәрәҙле телефон, микротулҡынлы мейес, электр ит турағысы, блендер һ. б.) лайыҡ буласаҡ. Бүләктәрҙе алыу өсөн почтальондың үҙе яҙҙырған квитанцияларҙың күсермәләрен редакцияға ебәреүе шарт.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30 НОЯБРЬ - 6 ДЕКАБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ - АҠЪЮЛАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуға хаҡы ирекле

№48 (570)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ырымбур башҡорттары ла...**

Башҡортостандан ярҙам өмөт итә



5

**Тыйыусыһы булғанда...**

тыйылып ҡына бара халыҡ



6

**Ирәндеккәй алтын йөҙөк булһа,**

Шул йөҙөккә Баймаҡ ҡаш икән...



8-9

**Монармы? Параллель донъямы?**

Нимә булды был?



12-13

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Әхлаҡһыҙлыҡ, бәйелһеҙлек әҙемтәһе дауалап булмай торған хәүефле сирҙәргә лә алып килә. Шуларҙың үлемеслеһе - СПИД. Уның хаҡында нимәр беләһегеҙ?*

***Гүзәл ҒӘБИТОВА, СПИД һәм йоғошло сирҙәрҙе иҫкәртеү һәм уға ҡаршы көрәш буйынса Республика үҙәгенең ойоштороу-методика эштәре буйынса баш табип урынбаҫары:*** 1987 йылдан алып, йәғни ВИЧ-инфекция менән сирлеләр күҙәтеүгә алынған осор эсендә республикала бөтәһе 17 216 сирле теркәлгән булһа, шуларҙың 3 434-е үлде ( 78-е - ситтән килгәндәр), 1 681 кеше башҡа төбәктәргә сығып китте (шуларҙың 380-е - сит төбәктекеләр). Әлеге көндә республикабыҙға Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килгән 759 сирле иҫәпкә алынған. Быйылғы йыл башынан Башҡортостанда бөтәһе 2 200 ВИЧ-инфекция менән зарарланыусы асыҡланды, шуларҙың 1 400-ө - ир-егеттәр, 800-ө - ҡатын-ҡыҙ. Быйыл ошо сир менән яфаланыусыларҙың 417-һе "теге донъя"ға китте. Бөгөнгө көнгә ҡарата республикабыҙҙа йоғошло ВИЧ сире менән зарарланғандар һаны былтырғы күрһәткестәр менән сағыштырғанда 2,61 процентҡа, ә үлеүселәр 13 процентҡа кәмерәк булһа ла, тынысланырға бер ҙә урын юҡ, тип әйтер инем, сөнки ошо сирҙе енси юл менән йоҡтороу бөтөн сәбәптәр араһында беренсе урында тора. Быйыл ноябрҙең 15-нә был күрһәткес 60,46 процент тәшкил итте, былтыр ул ун процент тирәһенә кәмерәк ине. Өҫтәүенә, сирҙе тап ошо юл аша йоҡторған ВИЧ-инфекция менән сирләүсе ҡатын-ҡыҙҙар һаны арта бара - улар йәмғеһе 65 процент тәшкил итә.

Һандар күп, әлбиттә, уларһыҙ эш итеп булмай, сөнки һандар һәм проценттар артында - кеше яҙмыштары, реаль ысынбарлыҡ. Үлмесле сирҙе енси юл аша йоҡтороусыларҙың артыуы йәмғиәтебеҙҙә әҙәп-әхлаҡ нормаларының түбәнәйеүе, эскелек һәм наркоманлыҡтың артыуы хаҡында ла һөйләмәйме ни? Республикабыҙ ҡалалары араһында Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Күмертау; муниципаль районлдарҙан Ишембай, Бөрө, Мәләүез, Ҡалтасы, Бишбүләк һәм башҡа ҡайһы бер урындарҙа хәл бик борсоулы. Шуныһын да әйтеп китеү кәрәктер: үлемесле сирҙе йоҡтороусыларҙың яртыһынан күберәген (54,56%) - 30-40 йәштәгеләр, 28 процентын 20-30 йәштәгеләр тәшкил итә. Уйлап ҡараһаң, был бит кешенең иң матур, иң сәмле, иң уңышлы һәм емешле уҡыу, хеҙмәт, ижад осоро! Ғүмерҙәрен күрәләтә һәләкәткә дусар итеүсе был йәш кешеләр араһында ваҡытында ғаилә һәм мәктәп тәрбиәһенән, әхлаҡ-әҙәп төшөнсәләрен аңлауҙан мәхрүм булып, күңеле аҙашып, ситтә тороп ҡалғандары күберәктер, шулай ҙа сирлеләрҙең бөтәһен дә "бер сыбыҡтан ҡыуылғандар" иҫәбенә индереү ҙә бигүк дөрөҫ булмаҫ, сөнки инфекцияны медицина учреждениеларында ҡан ебәреү кеүек йәки башҡа процедуралар мәлендә, йә булмаһа енси партнерының сирле икәнлеген белмәйенсә йоҡтороусылар ҙа байтаҡ бит. ВИЧ-инфекциялы ҡатындар бала тапҡанда ла сабыйҙарына ошо сирҙе "бүләк итеп" тыуҙыра. Шуға күрә ауырлы ҡатындар йөклөлөк буйынса ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһына иҫәпкә торғанда мотлаҡ рәүештә тикшереүгә ҡан тапшыра. Һәм, ғөмүмән, үҙҙәрен һау-сәләмәт иҫәпләгән башҡа кешеләргә лә әленән-әле анализға ҡан тапшырып, тикшерелеп тороу ҡамасауламаҫ ине. Ваҡытында асыҡланған сир дауалауға еңелерәк биреләүен онотмайыҡ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

**Баймаҡ районының билдәле тарих уҡытыусыһы, крайҙы өйрәнеүсе Айҙар Мәжитовты Европаға сәйәхәткә оло тулҡынланыу менән оҙатып ҡалғайныҡ. Башҡорт халҡының тарихын өйрәнеүгә ҙур иғтибар бүлгән ир уҙаманы 200 йыл элек булған Халыҡтар һуғышын реконструкциялауҙа ҡатнашыу, был ваҡиғаларҙа башҡорт халҡының айырым урын алыуын күрһәтеү маҡсаты менән сәфәр сыҡҡайны. Мөһим ваҡиғаларҙыҮҙәк телевидениенан күрһәткәндә милләттәштәребеҙҙең интервью биреүе, унда Айҙар МӘЖИТОВТЫҢ да булыуы оло ғорурлыҡ тойғолары уятты. Айҙар Мәжитов тарихи сәйәхәтенән алған тәьҫораттары менән уртаҡлашты, фотоһүрәттәре менән хайран ҡалдырҙы. Уның бәйән иткәндәре уҡыусыларға ла ҡыҙыҡлы һәм фәһемле булыр, тип ышанабыҙ.**

# ЕВРОПАНЫ ҺОҠЛАНДЫРҘЫҠ...

## рухыбыҙ менән



(Дауамы 11-се биттә)

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

(Башы 1-се биттә).

***Азамат ҠАШҠАРОВ, Баймаҡ районының табип-наркологы:*** Бынан бер нисә йыл элек Магнитогорскиҙа уҡып йөрөгән 5-6 студент егет бөтәһенә бер шприц менән героин ҡулланыуҙан ВИЧ-инфекция йоҡтороп, уҡыуҙан ҡыуылып ҡайттылар ҙа, беҙҙә иҫәптә торҙолар. Уларҙы дауаларға һәм даими күҙәтеү аҫтында тотorға тура килде. Әлеге көндә наркотиктар ҡулланыуҙан ВИЧ менән зарарланған бер кеше лә миндә иҫәптә тормай, ә теге егеттәрҙең береһе лә юҡ инде был донъяла, бер-бер артлы үлеп бөттөләр. Араларынан йәшерәге көслө препараттар ярҙамында бер аҙ йәшәр ҙә ине, бәлки, ләкин иммунитеты нуль кимәлендә, ябай ғына вирустарға ҡаршы ла организмы көрәшә алманы. Һалҡын тейҙереп, бронхит менән сирләне лә шунан әҙәм була алманы. Үлер алдынан үкенеп илағаны әле лә күҙ алдында тора: "Мин йәш бит әле, йәшәгем килә, ҡотҡарығыҙ инде", - тип илай меҫкен, ләкин СПИД - ул шундай сир, уға тарыма ғына, ә инде тарыһаң, яңынан йәш, көслө, матур сағына, был гүзәл, яҡты донъяға ер тырнап илаһаң да кире ҡайтыр юл юҡ. Тере мәйет булып, аҡтыҡ көндәрен иҫәпләргә генә ҡала ундайҙарға. Шуға күрә, йәштәргә әйтер һүҙем шул: аң булығыҙ, яман йоғонтоға бирелмәгеҙ, теләһә кем менән енси бәйләнешкә инмәгеҙ, тәртипле булығыҙ, ябай аҡыл менән йәшәгеҙ. Ошо һүҙҙәрҙе ҡат-ҡат ҡабатларға сәбәптәре лә бар шул. Был сирҙе хәҙер күбеһенсә тотанаҡһыҙлыҡ, тәртипһеҙ енси бәйләнештәр аша йоҡторалар. Хатта ки шундай әхлаҡһыҙлыҡҡа тиклем барып етәләр: ВИЧ-инфекция менән зарарланған ҡайһы берәүҙәр енси партнерҙарынан сирен йәшереп, бәйләнешкә инә һәм күрәләтә башҡаларҙы зарарлай. Шундай психикалы сирлеләр була бит: нинә мин генә яфаланырға тейеш әле, тип ҡарай улар был осраҡта. Ҡайһы бер ауылдарҙа әскелек көслө, буйҙаҡ йәшәгән ир-егеттәр байтаҡ. Бындай шарттарҙа, билдәле, йоғошло яман сирҙәрҙең таралыу ихтималы бик көслө. Шуға күрә, ил-йорт хәүефһеҙлегенә янаған бындай күренештәргә ҡаршы бөтә ил менән бер булып көрәшергә кәрәк. Ауыл хакимиәте биләмәләре етәкселәре, медицина хеҙмәткәрҙәре, аҡһаҡалдар менән агинәйҙәр ҡорҙары әүҙемселәре, уҡытыусылар уяулыҡ күрһәтергә, үҙ ауылдарында әхлаҡһыҙлыҡ, бәйелһеҙлек күренештәренә юл ҡуймау өсөн бөтөн көстәрен һалырға бурыслылар. Әйткәндәй, бындай бурысты улар иненә берәү ҙә көсләп таҡмай, әлбиттә, ләкин был һәр кемдең граждандлыҡ бурысы, выждан ҡушыуы тип ҡаралһа ине.

### Әхлаҡһыҙлыҡ, бәйелһеҙлек әҙемтәһе дауалап булмай торған хәүефле сирҙәргә лә алып килә. Шуларҙың үлемеслеһе - СПИД. Уның хаҡында ниҙәр беләһегеҙ?

***Азамат АБУТАЛИПОВ, журналист:*** Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм бер хәҙисендә: "Берәй ҡәүемдә аҙғынлыҡ, әҙәпһеҙлек, зина килеп сыға һәм ул киң таралыу ала икән, ул ҡәүемдә ата-бабалары күрмәгән-белмәгән ауырыуҙар, тағун тараласаҡ", - тип әйтә. Әйтерһең дә, Бәйғәмбәр быуаттар аша ҡарап, беҙҙең замандарҙы күргән. Әлбиттә, әхлаҡһыҙлыҡ, бәйелһеҙлек элек тә булған. Ләкин бөгөн ул барлыҡ сиктәрҙе үтеп, ҡот осҡос күләмдәрҙе алды. Бөгөнгө көндә ул - киң мәғлүмәт саралары, телевидение, интернет, китаптар аша пропагандаланған һәм ҙур килемдәр килтергән "йәшәү рәүеше". Тағы ла ҡурҡыныслырағы, был гонаһты (зинаны) ҡылған кешеләрҙең күпселегенең уны гонаһ, тип белмәүендә, аңламауында, белергә теләмәүендә. Бәйғәмбәр, ошондай ваҡыттар етеү менән элек күрелмәгән сирҙәр барлыҡҡа киләсәк, тип иҫкәрткән. Нимәһе ҡыҙыҡ, ҡайһы бер табиптар СПИД-ты "аҡ тағун" (белая чума) тип тә йөрөтә. Цивилизацияның ни ҡәҙәр йылдам үҫеүенә ҡарамаҫтан, СПИД (бәлки, ошо исем менән йөрөтөлгән тиҫтәләгән ауырыуҙар) дауалап булмаҫлыҡ сир һанала һәм кешелектең бәйелһеҙлегенә күрә бирелгән яза рәүешендә лә ҡабул ителә.

СПИД ҡына түгел, енси бәйелһеҙлек арҡаһында таралған бөтә ауырыуҙар ҙа ҙур ҡурҡыныс тыуҙыра. Хатта дауалап булғандары ла кешегә йоғонто яһамай ҡалмай: йә уның балаһы ауырыу тыуа, йә тыуғас ауырыуға тарый, йә бөтөнләй был ниғмәттән ҡолаҡ ҡаға. Шулай уҡ дөйөм аңһыҙлыҡҡа, зиһен ярлыланыуына килтерә.

Шуға күрә лә, үҙебеҙҙең, ғаиләләребеҙҙең, милләтебеҙҙең, кешелектең киләсәген теләйбеҙ икән, әхлаҡһыҙлыҡ, бәйелһеҙлек, аҙғынлыҡ уйыбыҙҙа ла булырға тейеш түгел. Ул саҡта СПИД та, Көнсығыш, Урта Европаны ялмаған демографик һәләкәт тә ҡурҡыныс булмаясаҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу миҙгеле тамамланыуға 20 көнләп кенә ваҡыт ҡалды. Почта бүлексәләренә барып, 2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 384 һум 36 тингә, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 414 һум 36 тингә яҙылып ҡуйһағыҙ, оторһоғоҙ.**

**Ә инде сентябрҙә, октябрҙә үк гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр беҙҙән ошо бүләктәрҙе алып ҡыуанyр, тип ышанабыҙ.**

Өфө ҡалаһынан Флүрә Ноғоманова, Рәйлә Бүләкова, Баймаҡ районы Үргә Таулыҡай ауылынан Зифа Ғүмәрова, Учалы районы Озерный ҡасабаһынан Нәкиб Әюпов - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**;

● Благовещен ҡалаһынан Гөлйәүһәр Сөләймәнова, Баймаҡ ҡалаһынан Таңһылыу Әүәлбаева, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Әнисә Юнысбаева, Әбйәлил районы Әбделмәмбәт ауылынан Рәшит Ҡарабадин, - **"Башҡорт халыҡ мәкәлдәре һәм әйтемдәре"**;

● Иглин районы Түбәнге Ләмәҙ ауылынан Рәшиҙә Ғәбәйҙуллина, Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан Т. Ишкилдина, Урал Псәншин Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Муса ауылынан Ф. Низаметдинова, Ғафури районы Ташбүкән ауылынан Рәшиҙә Таһирова, Ибраһим ауылынан Х. Ғәлиуллин, Мәләүез районы Арыҫлан ауылынан Ғәйнетдин Камалетдинов, Мәләүез ҡалаһынан Р. Хәзиева, Флүрә Йәрмөхәмәтова, Бөрйән районы Әтек ауылынан Фәнилә Нуриәхмәтова, Өфөнән Фәриә Ниғмәтова, Баймаҡ районы Билал ауылынан Рафиҡ Әбйәлилов, Ярат ауылынан Нәжип Дәүләтбирҙин, Әлшәй районы Иҙрис ауылынан С. Муллағәлиева, Ҡырмыҫҡалы районы Ҡырмыҫҡалы ауылынан Ғәлинур Ишемғолов, Шишмә районы Дурасово ауылынан Венера Хәснөтдинова, Әбйәлил районы Таштимер ауылынан Х. Латипов, Дәүләт ауылынан Азамат Мөхәмәдин, Ишембай районы Этҡол ауылынан В. Килсурина, Көйөргәҙе районы Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Чурин - **2014 йылға "Башҡортса дини календарь"**;

● Хәйбулла районы Маҡан ауылынан З. Ниғмәтуллина, Иҫәнгилде ауылынан Б. Ғәлина, Благовещен ҡалаһынан З. Ҡусәрбаева, Әбйәлил районы Сиҙәм ҡасабаһынан Зифа Мәжитова, Үргә Әбдрәш ауылынан Әхмәт Таһиров, Әлмөхәмәт ауылынан Р. Заманова, Ейәнсура районы Күгәрсен ауылынан С. Аҙнағолова, Үргә Муйнаҡ ауылынан Н. Райымғужина, Өфө ҡалаһынан Л. Ғәниева, Дыуан районы Мәсәғүт ауылынан Гүзәлиә Баева, Арый ауылынан Зәйнәб Вәлиева, Белорет районы Шығай ауылынан Р. Хәйруллина, Күгиҙел ауылынан М. Мәүлетова, Төркмән ауылынан Ш. Ишморатов, Благовар районы Һынташтамаҡ ауылынан Дилә Ғиззәтуллина, Учалы районы Озерный ауылынан Нәйрә Ишмөхәмәтова, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Искәндәрова, Ғафури районы Красноусол ауылынан М. Фәткезаманов, Салауат районы Малаяҙ ауылынан Х. Сабирова, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Р. Юлчурина - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**;

● Шишмә районы Түбәнге Хәжәт ауылынан Ғәлийән Төхвәтуллин, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Мәхмүҙә Исламғолова, Сәйгәфәр ауылынан Фирҙәүес Мырҙабулатова, Баймаҡ ҡалаһынан Г. Фәйезова, Учалы районы Уральск ҡасабаһынан Сәрүәрә Ғарипова, Ғафури районы Бурлы ауылынан Светлана Абдуллина, Бишбүләк районы Аҙнай ауылынан Рәлиә Кирәева, Сибай ҡалаһынан Фәрит Әхмәров, Әбйәлил районы Амангилде ауылынан Иштимер Ғүмәров, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Риф Кирәев - **Гөлфиә Янбаеваның "Елле фекерҙәр елгә осмаһын"**;

Баймаҡ районы Әхмәр ауылынан Мөхәмәт Әбдисов, Беренсе Этҡол ауылынан И. Аралбаев, Сәйгәфәр ауылынан Юнысбаева Гөлсирә, Ишембай районы Һайран ауылынан Ғәлимйән Яҡупов, Дыуан районы Арый ауылынан Жәмил Нуриев, Өфө районы Булгаково ауылынан Ф. Торомтаева, Межгорье ҡалаһынан Ф. Әксәнова, Әбйәлил районы Сиҙәм ҡасабаһынан Шамил Хәсәнов, Үргә Әбдрәш ауылынан Зөлфиә Әхмәтова, Нуриман районы Сурат ауылынан Айрат Фазлутдинов, Салаут районы Мөрсәлим ауылынан Юлиә Дилмөхәмәтова, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Хәнифә Йосопова, Әтек ауылынан З. Ҡужабаева, Ғафури районынан Миңнур Фәткузаманов, Сибай ҡалаһынан Х. Әбүбәкерова, Мәсетле районы Һөләймән ауылынан Ф. Зәкирйәнова, Мәләүез ҡалаһынан Рәфҡәт Айытҡолов - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" китаптарына лайыҡ булды**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөгә эш сәфәре менән килгән Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Балалар хоҡуҡтары буйынса вәкил Павел Астахов Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов менән осрашты. Балалар омбудсмены Өфөгә РФ төбәктәрен тикшереү буйынса үҙ эш планына ярашлы килгән. Президент менән әңгәмәлә Павел Астахов, республикала балалар йорттарын һәм уларҙа тәрбиәләнеүсе балалар һанын эҙмә-эҙ кәметеү бара, тип билдәләне. Ул республикала етем балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеүгә лә ыңғай баһа бирҙе. Осрашыу барышында ҡуҙғатылған тағы бер мәсьәлә балаларҙың үҙ-үҙенә ҡул һалыуы буйынса хәүефле статистикаға ҡағылды. Балалар омбудсмены үҙ-үҙенә ҡул һалыуға нимә булышлыҡ итеүен аңлау өсөн етди, аналитик, фәнни нигеҙләнгән тикшереү үткәрергә тәҡдим итте.

✓Өфөлә Башҡортостан Республикаһы мосолмандары Диниә назаратының VII отчет-һайлау съезы үтте, унда БР мосолмандар Диниә назараты рәйесе итеп ҡайтанан Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин һайланды. Ул республика мөфтиәте етәксеһе вазифаһын тағы биш йыл етәкләйәсәк. Йыйылыусылар алдында БР Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Рөстәм Мәрҙәнов, Рәсәй Мөфтөйҙәр советы рәйесе Рауил Ғәйнетдинов һәм башҡалар сығыш яһаны.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Сергей Молчановты Башҡортостан Республикаһы Президенты Хакимиәте етәксеһе итеп тәғәйенләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. 2006-2013 йылдарҙа Сергей Молчанов республиканың Октябрьский ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы булып эшләне.

✓"БР Торлаҡ төҙөлөшө фонды" дәүләт унитар предприятиеһы менән "Рәсәй һаҡлыҡ банкы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөнө. Уға ярашлы, Фондтан төҙөлөп яткан күп фатирлы торлаҡ йорттарҙан фатир һатып алған осраҡта "Рәсәй Һаҡлыҡ банкы" физик шәхестәргә ипотека кредиттары бирәсәк. Ипотека кредиттары алыу мөмкинлеге биргән аккредитланған объекттар исемлеге менән "БР Торлаҡ төҙөлөшө фонды" дәүләт унитар предприятиеһы сайтында танышырға мөмкин.

✓1 декабрҙән алыҫ араға йөрөүсе поезға билет алыу өсөн өҫтәмә шәхси мәғлүмәттәр - тыуыу датаһын һәм урының күрһәтеү талап ителәсәк, тип хәбәр ителә Ҡуйбышев тимер юлы сайтында.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ИРЛЕК БАРҘА, ИРЕК БАР...

## Ирек барҙа, ирлек бар

**Бер кеше батшалыҡтың законддарын боҙоп, яуаплылыҡҡа тарттырылған. Уға үлем язаһы бирергә тигән хөкөм ҡарары сығарғандан һуң, йола буйынса, батшаға алып килгәндәр. Батша үлем язаһына хөкөм ителеүсегә, үҙ яҙмышын үҙенә һайларға ҡушып, тимер ишеккә һәм дар ағасына эйәк һелкеп, икеһененең береһен һайларға бойорған. Хөкөм ителеүсе оҙаҡ уйланып тормаған, дар ағасын һайлаған. Шулай ҙа муйынына элмәк кейгәс, батшанан һорарға йөрьәт иткән:**

**-Батшам, ә тимер ишек артында нимә бар һуң?**

**-Бына шуға һәр саҡ аптырайым, - тип көлөп ебәргән батша, - ошо ике юлды мин һинең кеүек енәйәтселәрҙең барыһына ла тәҡдим итәм, тик барыһы ла дар ағасын өҫтөн күрә ниңәләр.**

**-Башымды элмәккә һалғас, мин был хаҡта бер кемгә лә әйтә алмаясаҡмын бит, батшам, тимер ишек артында нимә һуң? - тип инәлгән һаман да енәйәтсе.**

**-Нимә булһын, унда ирек, азатлыҡ, - тип һүҙен дауам иткән батша, - әммә бәндәләр шул тиклем билдәһеҙлектән ҡурҡа, шуға күрә хатта азатлыҡты, ирекке дар ағасына алыштырырға ризалар...**



Риүәйәт ошо урында тамамлана. Уның аҙағына күп нөктәләр ҡуйылыуы ла ваҡиғаның дауамлы булыуына ишаралағандай. Хәйер, риүәйәттәрҙең ишара, кинәйә асылы һәр ваҡытта ла уҡыусының фекерҙе логика йүнәлеше буйынса үҫтереүен, дауам итеүен талап итә. Риүәйәттең әһәмиәте лә тап шуға ҡайтып ҡала. Беҙ был күренеште "бик фәһемле булды, уйландырҙы" тип атайбыҙ. Шуға күрә аҙағы бәхетле тормош менән тамамланған әҫәрҙәргә шикләнеп тә ҡарайбыҙ. Беҙ ҙә шулай итәйек, йәғни уйланайыҡ. Ҡыҙыҡ, теге донъяның - ожмах рәхәтлегенең, тамуҡ ғазаптарының барлығына инанған дин әһеле, мәсәлән, риүәйәтте нисегерәк итеп дауам итер ине икән? Ул, моғайын, бәндәһенә фәҡәт Аллаһы Тәғәлә генә ғүмер биргәс, тик Ул ғына биргәнен кире тартып алырға хоҡуклы, тиер һүҙен башлап. Һәм хаҡлы ла булыр.

Хөрмәтле уҡыусым, беҙ ҙә уның логикаһына эйәреп, риүәйәтте дауам итеп ҡарайыҡ. Һеҙ енәйәтсе үҙ теләге менән дар ағасын һайлағандан һуң, тимер ишекте һайламағанына ғүмерлек үкенес белдереп, был донъянан илай-илай киткән, тип уйлайһығыҙмы? Йә, батша әйтмешләй, тимер ишек артындағы билдәһеҙлек арҡаһында енәйәтсе аҙағы билдәле, асыҡ булған дар ағасын һайлауы менән бәхетле булған тиһегеҙме? Әллә енәйәтсе артабан батша алдында теҙләнеп, уның аяғын үбеп, енәйәте менән түгел, ә дар ағасын һайлауына бәйле яңылышыуын белдереп, хатаһын танып, ялбарған тиһегеҙме? Әллә ваҡиға беҙҙең уйыбыҙ етмәҫ башҡасараҡ мәғәнәле йүнәлеш алғанмы?

Мин дә башта ошолайыраҡ уйлай инем, әммә диндарҙың логикаһы мине бөтөнләй башҡа йүнәлештә алып китте. Шулай итеп, риүәйәтте дауам итәбеҙ һәм бер юлы юғарыла ҡуйылған һорауҙарға яуап эҙләп тә ҡарайыҡ. Ҡабаланайыҡ, йәмәғәт, юғиһә, дар ағасы янында тороусы хөкөм ҡарарының үтәлешен көтөп тороусы баҫып торған бүкәнде тибеп йығыуы бар:

...-Нимә булһын, унда ирек, азатлыҡ, - тип һүҙен дауам иткән батша, - әммә бәндәләр шул тиклем билдәһеҙлектән ҡурҡа, шуға күрә хатта азатлыҡты, ирекке дар ағасына алыштырырға ризалар...

-Һеҙ яңылышаһығыҙ, батшам, һеҙ күрһәткән ике юлдан дар ағасын һайлаусылар һеҙгә ҡарағанда күпкә аҡыллыраҡ...

Был һүҙҙәрҙе ишеткән батша ултырған урынынан һикереп тороп, элмәккә муйыны кейҙерелеп, әмәлен көтөп торған хөкөм ителеүсе янына килеп етә һалған.

- Нисек улар минә ҡарағанда күпкә аҡыллыраҡ? Бына хәҙер ярты минуттан һинең үле кәүҙәң дарҙа бәүелеп торасаҡ. Һин хатта бер генә секундҡа ла яҡты донъяға кире ҡайта, бер генә тамсы һауа һулай алмаясаҡһың. Шул да булдымы һинең һәм һинең кеүектәрҙең минән аҡыллыраҡ булыуы? - тип ярһыуынан үҙенең һүҙҙәренә үҙе сәсәгән батша.

- Ә һеҙ, батшам, тимер ишектең артында нимә икәнлеген әйтеп бирҙегеҙ, ә бына дар ағасының арьяғында нимә булыуы хаҡында белә алаһығыҙмы һуң? - тигән батшаны сығырынан сығара алыуына оторо ҡыуанған енәйәтсе.

- Ю-ю-ю-ю-юк... - Батшаның тәүҙә ирендәре дерелдәргә, аҙаҡ бөтә тәне ҡалтырарға тотонған. -Бел-белмәйем... Ә дар ағасының арьяғында, ысынлап та, нимә бар һуң?

- Батша булып та шуны ла белмәгәс... Унда был донъя ғазаптарынан, мең мәшәҡәттәрҙән, ығы-зығынан, ауырыу тәндән, ҡартлыҡ ыҙалыҡтарынан ҡотолоу башлана. Һеҙ тимер ишек артында күрергә теләгән ысын азатлыҡ, ысын ирек, дөрөҫөндә, дар ағасы арьяғында башлана...

-Бының менән нимә әйтергә теләйһең? Һинең кеүектәрҙе дарға аҫтырып хаталанам, тимәксеһеңме?

-Тап шулай. Һеҙ кешеләргә үлем язаһы сығарып, ғәмәлдә, уларға ирек, азатлыҡ бүләк итәһегеҙ. Тап шуның өсөн дә беҙ тимер ишек артындағы ирекҡә, азатлыҡҡа ҡарағанда, ысын иректе, ысын азатлыҡты өҫтөнөрәк күрәбеҙ ҙә инде...

-Нимә, минең батшалыҡтағы ирек, азатлыҡ ысын түгел тимәксеһеңме? - инде тамам аптырауға төшкән батша.

-Бөтә халыҡ шулай уйлай. Әгәр ҙә киреһенсә булһа, минең кеүек һис бер ғәйебе булмағандар үлем язаһына хөкөм ителмәҫ һәм улар хөкөм ителгән осраҡта ла дар ағасын һайламаҫ ине бит, - тип хөкөм ителеүсе батшаны артабан бер һүҙ ҙә өндәшмәҫлек итеп ауыҙын яптырған.

Ошонан һуң батша үлем язаһына хөкөм ителеүсене азат итеп, тимер ишектең арьяғына сығарып ебәргән һәм үлем язаһын юҡҡа сығарған, имеш. Әлбиттә, был ваҡиға булмаған, беҙ уны үҙебеҙ логика ебе буйынса барып, уйлап ҡына сығарҙыҡ.

Ә тарихыбыҙға боролоп ҡараһаҡ, ошоға оҡшаш хәлдәр булған бит. Әйтәйек, Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналинға тотолғандан һуң сығарылған үлем язаһының каторга менән алыштырылыуы ошо беҙ күмәклә яҙған риүәйәтте иҫкә төшөрә. Европала мәғрифәтле диндар булып күренергә теләгән Екатерина Икенсе булышлыҡ итә быға, һәр хәлдә, рәсми фәндә был ҡараш йәшәй. Үҙ халҡы өсөн бәйғәмбәр итеп ебәрелгән батырҙы һәм шағирҙы язалап үлтерергә Аллаһтың гонаһынан ҡурҡҡан әбей батша, тигән фекер ҙә бар.

Беҙҙең халыҡта элек-электән "ирлек", "ирек" төшөнсәләре бер үк мәғәнәгә эйә булған. Улар бер ҡасан да бер-береһенән айырылмаған, айырым да була алмаған, береһенең юклығы икенсеһен инҡар иткән, йәки - киреһенсә. Ир кеше иле, халҡы өсөн ҡорбан булған осраҡта ла үҙенең ғүмерен ирек, азатлыҡ өсөн биргән. Тик риүәйәттәге хөкөм ителеүсе кеүек, дар ағасының арьяғындағы ирек, азатлыҡ хаҡында уйландымы икән улар? Һүҙемде үткән быуаттың 90-сы йылдарында яҙылған дүрт юллыҡ шиғырым менән тамамлайым. Шиғырым аҙағында күп нөктәләр тора:

*Ир-егеттән азаматлыҡ китһә,*
*Азатлығы бөтә, халҡы бөтә.*
*Халҡы бөткән ирҙең*
*"ир-егет" тип*
*Аталырға тулы хаҡы бөтә…*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡорт дәүләт медицина университеты командаһы нормаль физиология буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһында беренсе урын яуланы. Форум беренсе тапҡыр И.М.Сеченов исемендәге Мәскәү дәүләт медицина университеты базаһында үтте һәм Рәсәй Медицина фәндәре академияһы академигы Константин Судаков иҫтәлегенә арналды. Олимпиадала Рәсәйҙең бөтә төбәктәренән 24 команда ҡатнашты. БДМУ командаһы исеменән педиатрия факультетының 3-сө курс студенттары Валерий Сахаров, Елена Каширина, Мария Киселева, Айгөл Кәрәҙбаева сығыш яһаны.

✔Баш ҡаланың Орджоникидзе районында балалар һәм үҫмерҙәр араһында "Шәжәрә байрамы" конкурсы үтте. Конкурс йомғаҡтары буйынса төрлө номинацияларҙа еңеүселәр билдәләнде. Шәжәрәне ентекле өйрәнгәне өсөн Резеда Дәүләтйәнова (155-се һөнәри лицей), ғаилә йолаларын һаҡлаған һәм үҫтергән өсөн - Айгөл Нафиҡова (26-сы балалар баҡсаһы), иң тәрән тамырлы шәжәрә өсөн Илсур Әминев (Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы) бүләкләнде.

✔Республика предприятиелары һәм ойошмалары хеҙмәткәрҙәренең уртаса эш хаҡы сентябрҙә 21 733,4 һум тәшкил итте. Башҡортостанстат иҫәпләүҙәре буйынса, бер йылда эш хаҡы номиналь сағылышта - 9,9 процентҡа һәм реаль сағылышта, йәғни ҡулланыу хаҡтары индексын иҫәпкә алғанда, 3,8 процентҡа арттан. Статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, 2013 йылдың туғыҙ айында республикала ғинуар-сентябрҙә уртаса эш хаҡы 21 753,2 һум тәшкил итте.

✔"Етем балаларҙың юғары белем алыу өсөн айырым шарттарға хоҡуҡтарын тергеҙергә кәрәк", - тип иҫәпләй Башҡортостандан Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева. - Бер төркөм депутаттар "Белем тураһында" һәм "Етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы социаль яҡлау буйынса өҫтәмә гарантиялар тураһында" закондарға тейешле өҫтәмәләр индереү тураһында закон проектын әҙерләне лә инде. Уны яҡын араларҙа Дәүләт Думаһында ҡарау планлаштырыла.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Нәҡ ҡыҙҙар араһында тәртип боҙоуҙар артты. "14 йәшкә тиклемге ҡыҙҙарҙың йөклөлөгө криминаль характерҙа булыуы ихтимал", - тине омбудсмен һәм хоҡуҡ һаҡлау органдарын бындай эштәрҙе ентекләп тикшерергә саҡырҙы.*



*ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...*

# УЛАРҘЫ ХӘСТӘРЛӘЙБЕҘ...
## ә әхлаҡ мәсьәләһе?



**Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Балалар хоҡуҡтары буйынса вәкил Павел Астахов республика Хөкүмәтендә кәңәшмә үткәрҙе, ул унда опека учреждениеларын планлы тикшереүгә йомғаҡ яһаны.**

- Байтаҡ етди проблемалар һәм закон боҙоуҙар асыҡланды, әммә, ғөмүмән алғанда, хәлдәр ҡәнәғәтләнерлек, - тине балалар омбудсмены. - Бындай тикшереүҙәрҙең төп асылы - хеҙмәткәрҙәрҙе шелтәләү түгел, ә аҡыллы һәм һөҙөмтәле эшләргә өйрәтеү. Сөнки, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, оҙаҡ йылдар быныӊ менән бер кем дә шөғөлләнмәне.

Павел Астахов вице-премьер Лилиә Ғүмәроваға балалар йорттары һәм социаль приют етәкселәре менән ойоштороу кәңәшмәһе үткәреп, унда "тәрбиәләнеүселәрҙең шәхси эштәрендә нимә булырға тейешлеген ентекле аңлатырға" һәм төрлө органдар һәм структуралар менән үҙ-ара эшләү өсөн берҙәм стандарттар индерергә тәҡдим итте. Бындай сара директорҙарҙы законды боҙмаҫҡа мәжбүр итәсәк.

Тикшереү барышында асыҡланған тупаҫ закон боҙоуҙар араһынан балалар омбудсмены "Маячный" балалар йортонан 15 йәшлек тәрбиәләнеүсенең ике бүлмәле фатирын айына 300 һумға ҡуртымға тапшырыуҙарын билдәләне. Шул уҡ ваҡытта үҫмер иҫәбенә аҡса тулы күләмдә күсмәгән. Учреждениела торлаҡты ҡуртымға алыусының исемен әйтергә ҡыйынһындылар.

Етемдәрҙең милек хоҡуҡтарын боҙоу Йылайыр коррекцион мәктәп-интернатында, Аҫҡар, Түбә, Салауат балалар йорттарында асыҡланды. Хоҡуҡ яҡлаусы приставтар хеҙмәтенә лә үҙ дәғүәһен белдерҙе: алимент алырға тейеш күп балалар уларҙы алмай. Бушлай дауаланыу һәм реабилитациялау саралары менән тәьмин ителеү хоҡуғына эйә булған ҡайһы бер инвалид балаларҙың аҡсаһы кәрәкле кейем алыуға тотонолған. Яңауыл районында балаларҙың иҫәптәренән даими рәүештә көнкүреш кәрәк-яраҡтары өсөн аҡса алынған, шул уҡ ваҡытта һатып алыуҙарҙы дәлилләүсе чектарҙы күрһәтә алманылар.

Балаларҙың хәүефһеҙлеге проблемаларынан Павел Астахов ҡыҙҙарҙың үҫмер саҡта йөккә ҡалыуын айырып билдәләне. Былтыр ике мең бәлиғ булмаған ҡыҙҙың ауырға ҡалыуы теркәлде. 1006 йөклөлөк аборт менән тамамланды, 139 ҡыҙ йылына ике тапҡыр аборт яһатты. 127 ҡыҙ бала табыу йорттарында сабыйҙарынан баш тартты. Бынан тыш, нәҡ ҡыҙҙар араһында тәртип боҙоуҙар артты. "14 йәшкә тиклемге ҡыҙҙарҙың йөклөлөгө криминаль характерҙа булыуы ихтимал", - тип үҙ фекерен белдерҙе омбудсмен һәм хоҡуҡ һаҡлау органдарын бындай эштәрҙе ентекләп тикшерергә саҡырҙы.

**Ольга МОРТАЗИНА.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ӨФӨГӘ... ЯҢЫ ЙЫЛ ШЫРШЫҺЫНА

**Быйыл 23 декабрҙә Башҡорт дәүләт аграр университетының Йәштәр һарайында (элекке "Юбилей" мәҙәниәт һарайы) үтәсәк Өфөләге Президент шыршыһына бөтә республиканан 780 бала саҡырылған.**

Унда, һәр йылдағыса, уҡыу алдынғылары, мәктәп олимпиадалары, бөтә Рәсәй һәм төбәк фестивалдәре, конкурстар, спорт ярыштары еңеүселәре ҡатнашасаҡ. Байрам ҡунаҡтары араһында - күп балалы һәм әҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән балалар, шулай уҡ хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрби һәм эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәренең балалары.

- Алыҫ урынлашҡан 38 район һәм ҡалаларҙан делегация баш ҡалаға 22 декабрҙә киләсәк. Улар "Салют" балаларҙы сәләмәтләндереү шифаханаһында урынлаштырыласаҡ. Балалар өсөн танышыу кисәһе һәм яңы йыл дискотекаһы ойоштороласаҡ, - тип хәбәр итте БР Мәғариф министрлығының бүлек начальнигы Мәрүә Ғилметдинова. - Бөтә балалар ҙа бүләктәр - йомшаҡ уйынсыҡтар, татлы ашамлыҡтар һәм Зәйнәб Биишеваның "Һөнәрсе менән өйрәнсек" китабын аласаҡ.

Быйыл республиканың бәләкәс граждандарына "Яңы йыл музейы" музыкаль спектакль-әкиәтен күрһәтәсәктәр.

БР Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтендә аңлатыуҙарынса, тамашаның режисер-ҡуйыусыһы Илшат Фәхертдинов. Сценарий авторы - Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының әҙәбиәт бүлеге мөдире Владимир Аношкин. Ҡыш бабайҙың нисек Яңы йыл музейы төҙөүе һәм үҙе шунда юғалыуы, кем уны ҡотҡарыуы, терелгән мумиялар тураһында тарихты Башҡорт дәүләт академия драма театры, Өфө ҡурсаҡ театры һәм Милли йәштәр театры актерҙары күрһәтәсәк. Бынан тыш, ҡунаҡтарҙы Йәштәр һарайы фойеһында традицион программа көтә, унда улар әйлән-бәйлән уйнаясаҡ, йырлаясаҡ, күңелле конкурстарҙа һәм викториналарҙа ҡатнашасаҡ.

# МӘСКӘҮГӘ... ЯҢЫ ЙЫЛ ШЫРШЫҺЫНА

**Быйыл Кремлгә шыршы байрамына Башҡортостандан 115 уҡыусы барасаҡ, тип хәбәр иттеләр республиканың Мәғариф министрлығынан. Сағыу Яңы йыл тамашаһы 26 декабргә билдәләнгән.**

БР Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 24 декабрҙә бөтә республиканан уҡыусылар Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатында йыйыласаҡ, ә 25 декабрҙә махсус рейс менән Мәскәүгә осасаҡ. Илдең бөтә делегациялары, ете мең самаһы кеше, "Измайлово" ҡунаҡхана комплексына урынлаштырыласаҡ. Кисен балалар комплекстың концерт залына "Фунтик" эстрада-цирк тамашаһына барасаҡ. Төп тантана 26 декабрҙә 12 сәғәттә Дәүләт Кремль һарайында үтәсәк. Яңы йыл спектакле башланыр алдынан фойела Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу ҡатнашлығында тамаша буласаҡ, дизайн-студиялар, уйын майҙансыҡтары, техник һәм һынлы сәнғәт оҫтаханалары эшләйәсәк. Үҙҙәренең һәләттәрен республиканың бәләкәй "йондоҙсоҡтары" ла күрһәтәсәк. Өфөгә балалар шулай уҡ махсус авиарейс менән 27 декабрҙә ҡайтасаҡ.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ДИН ӘҺЕЛДӘРЕ ҠОР ЙЫЙҘЫ



**Башҡортостан мөфтөйҙәре яҡындағы биш йылға перспективаларҙы билдәләне. Өфөлә Башҡортостан Республикаһы мосолмандары Диниә назаратының VII отчет-һайлау съезы үтте, унда БР мосолмандары Диниә назараты рәйесе итеп ҡайтанан Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин һайланды. Ул республика мөфтиәте етәксеһе вазифаһын тағы биш йыл биләйәсәк.**

Съезда мосолман ойошмалары, Башҡортостан дәүләт власы органдары вәкилдәре ҡатнашты. Йыйылыусылар алдында БР Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Рөстәм Мәрҙәнов, Рәсәй Мөфтөйҙәр советы рәйесе Рауил Ғәйнетдинов, Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назараты рәйесе Мөхәммәт Тажетдинов, БР Президенты ҡарамағындағы Дәүләт конфессия-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет рәйесе Вячеслав Пятков, республика мөфтөйҙәре, башҡа конфессия вәкилдәре сығыш яһаны.

Ултырыш барышында Башҡортостан мөфтиәтенең башҡарған эштәре тураһында отчет тыңланды.

- Бөгөн республика мосолмандары Диниә назараты ислам ҡиммәттәре нигеҙендә шәхес тәрбиәләү, граждандыҡ сифаттары, ватансылыҡ һәм дингә тигеҙ ҡараш булдырыу курсын алып бара. Шул уҡ ваҡытта дини белем биреүҙе үҫтереүгә, конфессия-ара диалогты киңәйтеүгә, дини экстремизмға ҡаршы тороуға айырым иғтибар бүленә. Киләсәктә лә һеҙҙең әүҙем позицияғыҙ быуындарҙың әхләҡи күсәгилешлеген һаҡлауға, Башҡортостан халыҡтары араһында дуҫлыҡты нығытыуға булышлыҡ итәсәгенә ышанам, - тине Рөстәм Мәрҙәнов.

Рауил Ғәйнетдинов мөфтиәттең ҡайтанан һайланған етәксеһе Нурмөхәмәт Ниғмәтуллиндың абруйын билдәләне.

- Төньяҡ Кавказ, Алыҫ Көнсығыш һәм Себер, илебеҙҙең үҙәк өлөшөндәге дини идаралыҡтар етәкселәре уны яҡшы белә һәм ихтирам итә. Төрлө мәсьәләләр буйынса компромисс табыу һәләтен туғандаш диндәр - традицион конфессиялар башлыҡтары ла юғары баһалай. Уны Рәсәй Мөфтөйҙәр Советы ҡушма рәйестәре лә ихтирам итә, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рауил Ғәйнетдинов.

**"БАШИНФОРМ".**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Өфө" Халыҡ-ара аэропорты үткән дүшәмбе көндө 2013 йылда ике миллионынсы пассажирын хеҙмәтләндерҙе. Ул Мәскәүгә эш буйынса командировкаға осоусы, Өфөлә йәшәүсе Гөлнур Хунафина булды. Почетлы пассажир бүләккә бонуслы хеҙмәттәр пакеты алды. "Өфө" Халыҡ-ара аэропорты" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Александр Андреев әйтеүенсә, пассажирҙар ағымы һуңғы 20 йыл рекордын уҙҙы. Йыл аҙағына тиклем ул 2,2 миллион кешегә етәсәк. Абсолют тарихи максимум Өфөлә 1992 йылда теркәлгән - ул саҡта өс миллион пассажир рубежын уҙған. "Өфө" аэропорты көнөнә 40 рейстан алып 50 рейсҡа тиклем, йәғни 7-8 мең пассажирҙы хеҙмәтләндерә.

✓Өфөлә 30 ноябрҙә сираттағы "Шәмбе-артыҡ эшләү" экологик акцияһы уҙасаҡ, уны "ЭКА" "йәшел" хәрәкәте ойоштора. Был көндә барлыҡ теләүселәр макулатура, полиэтилен, пластик һәм алюминий килтерә ала, улар һуңынан икенсел эшкәртеүгә оҙатыласаҡ. Экоакцияны үткәреү ваҡыты - сәғәт 11-ҙән 13 сәғәткә тиклем. Икенсел ресурстар Республика балалар экологик-биологик үҙәгендә (Өфө, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 14/1) һәм БР "Тәбиғәт" дәүләт унитар предприятиеһында (С. Кувыкин урамы, 102) ҡабул ителәсәк. Шулай уҡ БР "Тәбиғәт" дәүләт унитар предприятиеһына боҙолған термометрҙар һәм энергия һаҡлаусы лампалар тапшырырға мөмкин буласаҡ.

✓"Мәғариф" масштаблы проекты сиктәрендә "Ростсельмаш" ауыл хужалығы техникаһы етештереү буйынса ватандың алдынғы предприятиеһы Рәсәй аграр вуздарында үҙенең фирма аудиторияларын аса. Уларҙың береһе яҡын арала Башҡорт дәүләт аграр университетында асыласаҡ. Мультимедия һәм интерактив ҡорамалдар студенттарға белемде еңелерәк үҙләштерергә ярҙам итергә тейеш, ә практик дәрестәр өсөн компания юғары уҡыу йорто ҡарамағына ACROS ғаиләһенән яңы заманса комбайндар бирәсәк, тип аңлаттылар Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә.

✓Башҡортостан ҡышҡылыҡҡа әҙерлек сифаты буйынса Рәсәй төбәктәре рейтингында дүртенсе позицияла тора. Рейтингты төҙөүсе - РФ Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы - Рәсәй Федерацияһы субъекттарының башҡарма власть органдары эшмәкәрлеге һөҙөмтәлелеген көҙгө-ҡышҡы осорға әҙерләнеү һәм уны үткәреү мониторингы һөҙөмтәләре буйынса баһаланы.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ЫРЫМБУР БАШҠОРТТАРЫ ЛА...

## Башҡортостандан ярҙам өмөт итә



**Ырымбур ҡалаһында төбәк башҡорттарының 5-се ҡоролтайы булып үтте. Сарала БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Франис Сәйфуллин, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев, уның беренсе урынбаҫары Хәләф Ишморатов, Ырымбур өлкәһенең вице-губернаторы Олег Димов, Өфөнән килгән ҡунаҡтар ҡатнашты.**

Башҡорттар, Башҡортостан хаҡында һөйләгәндә Ырымбурҙы телгә алмай үтеп булмай. Тарихсылар билдәләүенсә, оло ихтилалдарҙан һуң башҡорттар тап Ырымбур далаларында ышыҡланыу урыны таба. 1917 йылда башҡорт милли хәрәкәте лә тап Ырымбурҙа тоҡанып китә. Тарихтың ҡанлы биттәре лә бар был яҙмала. Тап Ырымбур ҡалаһын төҙөү маҡсатында ебәрелгән Кириллов экспедицияһы сәбәпле тоҡанып киткән 1735-1740 йылдарҙағы ихтилалды баҫтырыу башҡорттарҙың яртыһынан күбеһе ҡырылыуына килтерә. Ә инде егерменсе быуат башында милли хәрәкәттең үҙәге булыуына ҡарамаҫтан, Ырымбурға административ яҡтан Башҡортостан менән бергә булырға яҙмай.

Булып үткән ҡоролтай йыйынында Ырымбур өлкәһендә йәшәгән милләттәштеребеҙҙең бөгөнгө хәл-торошо хаҡында һүҙ барҙы. Әлеге көндә Ырымбур өлкәһе башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәр иҫәбенә инә. Һуңғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, бында 46 мең тирәһе милләттәшебеҙ йәшәй. Был 2002 йыл менән сағыштырғанда 7 меңгә әҙерәк. Башҡорттарҙың баҙар иҡтисады шарттарына әҙер булмай сығыуы, шуның эҙемтәһе булараҡ йәштәрҙең күпләп ауылдарҙан китеүе, демографик хәлдең киҫкенләшеүе, ассимиляция күренештәре халыҡтың күпләп кәмеүенең сәбәптәре булып тора. Өлкәлә туған телгә ҡағылышлы хәл тағы ла киҫкенерәк. Тикшеренеүҙәргә, һорау алыуҙарға ярашлы, башҡорт телен башлыса 35 йәштән оло быуын ғына белә. Ә 35 йәштән кесерәктәр үҙҙәрен башҡорт тип һанаһа ла, туған телдәре итеп башҡорт телен таныһалар ҙа, көндәлек тормошта урыҫ телендә аралашыуға өҫтөнлөк бирәләр. Һандар менән әйткәндә, йәштәрҙең 39 проценты ғына туған телдә иркен аралаша, 6 проценты уны әҙерәк белә, 3 проценты анлай, ә 49 проценты бөтөнләй белмәй. Был күренеш Ырымбур кеүек ҙур ҡалаларҙа ғына түгел, хатта башҡорт мөхите һаҡланып ҡалған ауылдарҙа ла күҙәтелә. Шундай һандар ҙа килтерелде: мәктәп йәшендәге башҡорт балаларының 10 процент самаһы ғына туған тел мөхитенә йәлеп ителгән.

Ырымбур башҡорттары был хәлдең төп сәбәбен башҡорт мәктәптәренең ябылыуына һылтай. Бер нисә йыл элек кенә башҡорт теле уҡытылған 44 мәктәп иҫәпләнһә, бөгөн уларҙың һаны 19-ға тиклем кәмегән. Эшләп килгәндәрендә лә туған тел дәрестәре сәғәттәре ҡыҫҡартылған. Балалар кесе синыфтарҙан алып урыҫ телендә белем ала. Ҡалаларҙа иһә хәл тағы ла ҡатмарлыраҡ. Ырымбурҙа уҡытыу башҡорт телендә алып барылған бер генә белем йорто ла, исмаһам, йәкшәмбе мәктәбе лә эшләмәй. Демократия һәм башҡорт үҙаңы шауҡымы булып асылған педагогия училищеһы, юғары уҡыу йорттарында асылған башҡорт бүлектәре лә эшмәкәрлеген туҡтатҡан. Һөҙөмтәлә, өлкәнең баш ҡалаһында йәшәгән милләттәштәрҙең балалары ғилем офоҡтарын икенсе телдә ала.

Ошо ауырлыҡтарҙы еңеп, милләтте, тамырҙарҙы һаҡлап йәшәргә тырышыусы кешеләр ҙә бар өлкәлә. Улар милләттәштәрен үҙ өлгөһөнә эйәртергә, үҙҙәре үткәргән сараларға йәлеп итергә тырыша. Мәҫәлән, Красногвардейский районындағы Бәхтийәр ауылы йәштәре үҙҙәре аҡса йыйып, мәсет төҙөгән. Ауылдарында ябыҡ каток та эшләп ҡуйғандар. Бәхтийәрҙә йәшәгән Пролетар ауыл советы рәйесе Марат Бәхтийәров әйтеүенсә, бөгөн милләттәштәрҙе берләштергән, уларҙың рухи һәм матди ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерергә ынтылған иң мөһим үҙәк улар. Уның фекеренсә, зарланып ҡына йәшәү дөрөҫ түгел. Башҡорттар бер нимәгә ҡарамайынса, үҙҙәрен һаҡлап ҡалырға, балаларына, ейәндәренә милли рухты һеңдерергә, уларҙан көслө белгестәр, белемле сәйәсмәндәр тәрбиәләргә тейештәр. "Беҙ бөгөн матур итеп һөйләп, ә иртәгә һөйләгәндәребеҙҙе онотһаҡ, ҡоролтайҙар ойоштороуҙың фәтүәһе булыр микән? Ҡайҙа беҙҙе берләштерәсәк, бер йүнәлештә эшләргә этәргес бирәсәк көслө идеология?" - тигән һорауҙы ла яңғыратты Марат Бәхтийәров. Бәхтийәр һымаҡ айырым ауылдар миҫалы өлкәлә йәшәгән башҡа милләттәштәргә "йоҡмауына" әсенеүен дә белдерҙе.

Берләшеү, тигәндәй. Ырымбур башҡорттары өсөн бик актуаль булған мәсьәләрҙең береһе булып тора был. Шулай булмаһа, ҡоролтай ултырышындағы һәр сығыш яһаусы үҙ-ара низағлашыу, уртаҡ тел таба алмау мәсьәләһен хәл итергә, милләткә хеҙмәт итеү урынына шәхси мәнфәғәттәрҙе алға һөрөү кеүек күренештәрҙе бөтөрөргә өндәмәҫ ине.

Проблемалар хәл итмәҫлек тә түгел һымаҡ. Өс йыл буйы Ырымбурҙа һабантуй үткәрелмәүендә өлкәнең властарын ғына ғәйепләп булмай бит. Ниңә был тәңгәлдә башҡорттар үҙҙәре әүҙемлек күрһәтмәй? Ҙур башҡорт ауылдарында мәктәптәр асыу, башҡорт синыфтарын булдырыуҙы ла бер кем дә тыймай. Бер аҙ ойошҡанлыҡ ҡына кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күрше өлкәлә йәшәүсе милләттәштәребеҙ менән аралашҡанда бер нисә әңгәмәсем: "Әгәр Башҡортостанда йәшәһәк, беҙҙең мәктәптәребеҙ ябылмаҫ, гәзитте ("Каруанһарай" гәзитен) халыҡ алдырыр, балалар теләп туған телдәрендә аралышыр ине, Каруанһарай өсөн йылдар буйы судлашмаҫ инек", - тип үҙенсәлекле һағыш белдерҙе. Улар аңында, әлбиттә, Башҡортостан башҡорттарҙы ҡурсалаусы, үҫтереүсе, берләштереүсе үҙәк булып ҡала. Сит өлкәләрҙә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең өмөттәрен аҡлап, инаныуҙарына төкөрмәһәк ине лә бит...**

Азамат САЛАУАТОВ.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# СТАЖЫҢ БУЛМАҺА...

## хеҙмәт пенсияһы ла юҡ

**Үткән аҙнала РФ Дәүләт Думаһы тәүге уҡыуҙа пенсия реформаһына ҡағылышлы закондар йыйынтығын ҡабул итте. Чиновниктар раҫлауынса, улар был системаны ғәҙелерәк итеү һәм ҡартлыҡ көндә беҙҙең тупланманы һаҡлау өсөн тырыша. Киң мәғлүмәт сараларында, яңы реформа үткәреү мотлаҡ кәрәкме икән һуң, тигән һорау йыш яңғырай. Был мәсьәләгә ҡарата белгес-эксперттарҙың нигеҙләмәһе менән ризалашмай ҙа булмай.**

Элекке системаны ҡалдырған хәлдә, уның даими рәүештә аҡса етмәүҙән зыян күрәсәге көн кеүек асыҡ. Пенсия фонды бюджеты әле лә бит дөйөм бюджеттан аҡса күсереү юлы менән һәм юғары социаль түләүҙәр иҫәбенә тулыландырыла. 2030 йылға пенсия системаһына взнос түләүсе эшләүселәр һаны менән унан пенсия алыусылар һаны тигеҙләнәсәк. Артабан ҡараһаҡ, беҙҙе, ғөмүмән, социаль абсурд көтә: пенсионерҙар һаны эшләүселәрҙән артығыраҡ килеп сығасаҡ. Донъяла бындай пенсия системаһы түгел, иҡтисад төрө лә юҡ, ти белгестәр. Бындай хәлгә төшмәҫ өсөн бер нисә төрлө юл күрә эксперттар: йә һалымдарҙы арттырырға кәрәк, тик был иҡтисад үҫешен тотҡарлаясаҡ; йә пенсия күләмен кәметергә - был социаль йәһәттән мөмкин түгел; йә пенсия йәшен арттырырға. Ихтимал, ошо һуңғы вариантта туҡталыуҙары бар. Был бөтә донъя күләмендә шулай, тимәк, беҙгә лә бының менән килешергә тура киләсәк - пенсионерҙарҙың күпселеге барыбер хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң да эшләүен дауам итә бит, шулай булғас, был граждандар өсөн көтөлмәгән шаңҡыу булмаҫтыр, моғайын.

Әйткәндәй, яңы формула баштан уҡ шуға йүнәлтелгән: пенсияны бәрәү ҙә кәм алмаясаҡ. Ә инде кемдең эш хаҡы яҡшы һәм стажы ҙур, улар өсөн был ысул, әлбиттә, отошло. Бына шунда килеп сығасаҡ та инде "отолоусы"лар, йәғни улар, иң беренсе сиратта - 15 йыл да эш стажы булмағандар. Улар хеҙмәт пенсияһы алмаясаҡ. Әлегесә, социализм заманының бер әхлаҡ ҡағиҙәһе яңынан тергеҙелеүе бик ихтимал: кем эшләмәй, шул ашамай, ти торғайныҡмы әле?..

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Эт тырнағы сыҡһа

❖ 5-10 тамсы лимон һуты йәки уның эфир майы һалынған йылы һыуҙа тотоп, ҡул тиреһен йомшартҡас, эт тырнаҡтарын әҫәҡ менән генә алырға. Аҙаҡ ҡулдарҙы крем йәки берәй май менән ыуаларға, йомшартырға.

### Күҙҙәргә дауа

❖ Конъюнктивит булһа, ярты стакан ваҡланған ҡыяр ҡабығын ҡайнаған һыуға һалып, 1 балғалаҡ сода өҫтәргә һәм 15-20 минут тоторға. Шул төнәтмәгә мансылған сепрәкте күҙгә ҡуйып торорға. Көнөнә бер нисә ҡабатлаһаң, 4-5 көндә сир юҡҡа сыға.

### Нервы ауырыуҙарынан

❖ 200 мл ҡайын еләге һутын 100 мл кишер һутына ҡушып болғатырға һәм көнөнә 3-4 тапҡыр ашағандан һуң 1 сәғәт үткәс эсергә.

### Йыуан эсәк ауыртҡанда

❖ 1 ҡалаҡ ҡайын еләге япрағы һәм тамырына 400 мл ҡайнап торған һыу ҡушып, 10-15 минут ҡайнар һыуға ултыртып йылытырға. Ике аҙна буйы ашар алдынан көнөнә 4-5 мәртәбә 50 мл эсергә.

### Ауыҙ эсе боҙолһа

❖ Ауыҙ эсе боҙолғанда, теш төптәре ауыртҡанда каланхоэ гөләнөң һутында сылатылған сепрәкте 15-20 минутҡа ауыҙға ҡуйырға кәрәк. Быны көнөнә 3-4 тапҡыр эшләү отошло.

❖ Календула сәскәһен дә онотмайыҡ. 1 ҡалаҡ сәскәнә 200 мл ҡайнар һыуҙа (һыу "мунса"һында, өҫтөн ябып) 30 минут тоторға һәм шуның менән ауыҙҙы сайҡатырға.

### Гастриттан иң ябай ысул

❖ 1 аш ҡалағы кипкән кесерткән япрағын 1 стакан һыу иҫәбенә 5-10 минут ҡайнатып, ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр аш ҡалағы эсергә.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

## БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

**Ҡорт доғаһы менән имләү.** Аҡ тимрәүҙе Ҡорт доғаһын әйтеп тә имләгәндәр. Доға шунан ғибәрәт:

*Әм-Әмрәмүн, Иннәкә Мөмрәмүн,*
*Ләйсән, әбәсән, әбсән.*
*Әй, телсә, ҡороғол, ҡалмағол,*
*Тфү, тфү, тфү!*
*Алтын башлы атағыҙ,*
*Айыры ҡойроҡ анағыҙ.*
*Күптер һеҙҙең балағыҙ,*
*Берегеҙ ҙә ҡалмағыҙ!*
*Ҡылдан нәҙек ҡылған ҡорт,*
*Ялан ерҙән килгән ҡорт.*
*Кил, ҡортом, кил, ҡортом,*
*Әйүп бәйғәмбәрҙең хөрмәтенә,*
*Кил, ҡортом, кил, ҡортом!*

Ошо доғаны уҡыһаң, тимрәү ҡорттары сыға икән. Шунан ауырыу бөтә, тиҙәр.

**Көмөш ҡара име.** Ҡояш байығас, тимрәүҙе көмөш ҡара менән кәртәләп имләйҙәр. Бының өсөн көмөш ҡара менән тимрәү сыҡҡан ерҙе һыҙып кәртәләйҙәр. Кәртәләгәндә ошо әпсенде лә әйтәләр:

*Әм-әм-әмерәү, тим-тим-тим(е)рәү,*
*Бөтһен, ҡороһон, име-томо шул булһын!*
*Тфү, тфү, тфү.*

**Тауыҡ тиҙәге име.** Тимрәү сыҡһа, тауыҡ тиҙәге менән дә имләгәндәр. Бының өсөн тауыҡ тиҙәген алып, йылытып, тимрәүгә һылағандар, һылағанда ошо әпсен уҡылған:

*Тим-тим-тим(е)рәү, миң-миң-миң(е)рәү.*
*Битеңә ҡара, йөҙөңә ҡара!*
*Тфү, тфү, тфү! Ҡас, кит, бөт!*

**Балта туты име.** Тимрәү булһа, мейескә һәйбәт итеп ут яғалар. Шунан мейестәге күмергә йәш тал сыбығын һалып, һуты сыҡҡансы мейестә тоталар, һуты сыҡҡас, уны алып, тутыҡҡан балтаны түңәрәк яһап майлайҙар. Түңәрәтеп майлағанда "Тимрәү әпсенен" әйтәләр, аҙаҡ сүрә уҡып ҡуялар.

**Киртек име.** Һепертке һабынан бер сыбыҡ алып, шуға нисә сөйәл, шунса киртеҡ киртәһең. Бөрәү:

- Нимә киртәһең? - тип һорай. Имсе:

- Киртеҡ киртәм, - ти (өс тапҡыр ҡабатлана). Шулай әйтешкәндән һуң сыбыҡ менән үҙеңә табан һыпырырға ла сыбыҡты өрләккә ҡыҫтырып ҡуйырға кәрәк.

**Ҡара еп име.**

- Нимә төйәһең?

- Сөйәл төйәм, - тип йыуан ҡара еп алып, төйнәйһең дә төйнәйһең. Беренсеһендә өс мәртәбә, икенсеһендә - биш, өсөнсөһөндә - ете, дүртенсеһендә - туғыҙ һәм шул рәүешле арттыра барырға. Төйнәгән бер епте бысраҡ йыуынды һыу менән сығарып түгәләр. Түккән ваҡытта: "Минең ҡулым түгел, Фәйшә, Фатиманың ҡулы", - тип әйтеп түгергә кәрәк. Шул eптәр серегәс тә, ҡулдағы сөйәлдәр бөтәргә тейеш.

**Ағас күмере име.** Сөйәл сыҡһа, ағас күмерен онтайҙар, шунан һуң сәтәкәйҙе һыулап, ҡоромдо йыйып алалар һәм ошо әпсенде әйтәләр:

*Бур топтом,*
*Битеңә ҡара яҡтым.*
*Ай ҙа ҡайтты,*
*Көн дә ҡайтты,*
*Һин дә ҡайт!*
*Бер имләйем,*
*Берҙән ҡайт!*

Һамаҡты ете тапҡыр ҡабатлағас, доға ҡылалар: *"Субхәнәллаһи, уәлхәмду лилләһи, уә лә иләһә иллол-лаһу, Аллаһу әкбәр!*
*Сәбәп минән булһын, Сихәт Алланан булһын.*
*Тфү, тфү, тфү!"*

**Ботал име.** Сөйәл сыҡһа, уны ағас ботағы менән имләйҙәр. Бының өсөн ботаҡ менән төртөп, шулай тип һамаҡлайҙар:

*Сөйәл сөрөккә сыҡһын,*
*Сөрөк дүңгәккә сыҡһын!*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

# ТЫЙЫУСЫҺЫ БУЛҒАНДА...

## тыйылып ҡына бара халыҡ



**Баймаҡ районының Мерәҫ ауылы "Айыҡ ауыл - 2013" республика конкурсында ҡатнашып, "Граждандыҡ әүҙемлеге буйынса иң яҡшы һөҙөмтә" номинацияһында еңеүсе булды.**

Эйе, тап граждандыҡ әүҙемлеге, йәғни ауыл халҡының үҙенең сәме, илһөйәрлеге, балаларҙы, йәштәрҙе, ауылдаштарҙы иман юлына өндәүе һөҙөмтәһендә генә өлгәшеп була шул айыҡлыҡҡа. Ошо хәҡиҡәтте расланы быйыл икенсе тапҡыр үткәрелгән "Айыҡ ауыл" республика конкурсы. Ошо хәҡиҡәткә үҙ-үҙҙәрен ышандырҙы конкурста ҡатнашыусы ауылдар халҡы. Улар тарафынан айыҡлыҡ өсөн көрәш юлында байтаҡ тәжрибә тупланды, иң мөһиме, "Ниәт иткәндә, "йәшел йылан" енелмәҫлек яуыҙлыҡ түгел!" тигән һығымталар яһалды

Мерәҫтәр иһә айыҡлыҡҡа юлды хәтәр бер ғәҙәтте үҙгәртеүҙән башлай: быға саҡлы егеттәрҙе армияға иҫерек табындар, иҫерек ата-әсә, иҫерек йәштәр оҙатһа, хәҙер иһә оҙатыу кисәләре мәсеттә атҡарыла. Аяттар, нәсихәттәр уҡыла, ҡорбандар салына, изге теләктәр менән егеттәргә аҡ һәт эсерелә. Егеттәр тыуған ауылынан ауыҙына бер грамм да хәмер алмай, айыҡ килеш Баймаҡ военкоматына юллана. Был йола военкоматта ла дауам иттерелә. Бына шулай, биш йыл элек мерәҫтәр башлаған айыҡлыҡ йолаһы хәҙер бар районға таралған.

Ә бөтә был иман-тәртип мәсьәләләрен ауылдың ағинәйҙәре, аҡһаҡалдары, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре тормошҡа ашыра. Битараф булмаған берәй ағинәй йә аҡһаҡалдың, йә ауыл хакимиәте башлығының ауыҙынан ниндәйҙер тәҡдим яңғырауы була, ауыл китапханасыһы Дилбәр Яхина был тәҡдимде планлаштырып, аҡ ҡағыҙға сценарий итеп төшөрә лә һала. Мәҙәниәт йортондағы, тәбиғәт ҡосағындағы бар саралар, шулай уҡ мәсеттә егеттәрҙе армияға оҙатыуҙарбарыһы ла Дилбәр Ғәйфулла ҡыҙы сценарийҙары буйынса үтә. Ә ауылда Ғәбит Ямантаев, Рафиға Әсмәндийәрова, Зәкирә Ҡәҙербаева кеүек битараф булмаған кешеләр байтаҡ. Һәр хәлдә, был ағинәйҙәр һәм аҡһаҡалдар ауыл тормошон күҙ мөнөш ҡаш арарaһында тоторға тырыша. Ауыл хакимиәте башлығы Тансулпан Хафизова ла, ауыл мәсете имамы Хәмзә хажи Хафизов та уларға терәк-таяныс.

- Күптәр Хәмзә хажи Хафизовтың нәсихәттәренән һуң айығып, намаҙға баҫты, - тип һөйләй ағинәй Рафиға Әсмәндийәрова. - Үткән йомала мәсеткә 17 ир-егет килде, араларындағы күбеһе йәш егеттәр. Шулай уҡ Хәмзә хажи тырышлығы менән йома көндәрендә, дини байрамдар мәлендә, 1 сентябрҙә магазиндарҙа иҫерткес эсемлектәр һатыу тыйылды. "Тәңкә" магазинында хәмер бөтөнләй һатылмай. Бына башҡа магазиндарыбыҙ хужаларын да шуға өндәйбеҙ әле. Кеше бит хәмер күҙ алдында булғанда ғына һатып алып эсә, булмаһа, эҙләп йөрөмәй. Көмөшкә ҡойоусыларҙы ла туҡтата алырбыҙ тип уйлайым. Ундайҙарҙың да өйҙәренә барабыҙ, ауыл хакимиәтенә саҡыртабыҙ. Элек тыйылманы бит инде был шөғөлдәр. Тыйғанда, тыйылыуға бирелеп кенә бара ул беҙҙең халыҡ. Был беҙҙе ҡыуандыра...

Был ауылда тағы нимә ҡыуандырҙы? Балалар булмауы арҡаһында бер нисә йыл элек балалар баҡсаһын ябҡан булғандар. Мәктәпкәсә йәштәге бәләкәстәр мәктәп эргәһендәге төркөмгә генә йөрөгән. Бына быйыл Яңы йылға тиклем балалар баҡсаһын янынан асырға торалар, республика бюджетынан уны ремонтлауға аҡса бүлдереүгә өлгәшкәндәр. Баҡса асылыуын 70-тән ашыу бала көтөп тора ауылда. Бына был ҡыуаныс, исмаһам!

Айыҡлыҡҡа юл һалған әүҙем ағинәйҙәр һәм аҡһаҡалдар башҡа йолағәҙәттәрҙе лә тергеҙеүгә тотонған. Йыл да балалар һабантуйы үткәреп, киләсәк быуындың күңелен күрәләр. Ауырыуҙар, инвалидтар, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары ла иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Уларға матди йә дарыу-фәлән менән ярҙам итеү өсөн мәсеттә йыйылған саҙаҡанан өлөш сығаралар. Экологик өмәләр ойоштороу ныҡлы ғәҙәткә инеп бара. Быйыл ғына әллә нисәмә шишмәне таҙартҡандар. Уларҙы кәртәләп алып, буяп, эскәмйәләр эшләп ултыртҡандар. Ауыл халҡы менән дәррәү үткәрелгән ошондай өмәләрҙән һуң, самауырҙар килтереп, ҡуҡмаҡлап үлән сәйе ҡайнатып эсеүҙәр ҙә араларҙы яҡынайта, күңелдәрҙе бөтәйтә. Ғөмүмән, бергәләп сәй табыны артында ултырып аралашыу иң матур мәл бит инде ул беҙҙең халыҡта. Ә инде сәй эскән мәлдә кемдер йырлап ебәрһә, мөнәжәт, бәйет әйтһә, хас та боронғоса, әле беҙ онотоп өлгөрмәгән әләсәйҙәр фигеленсә була инде.

...Бына беҙ ҙә мәйеленә тап килтерергә булдыҡ. Мерәҫ ағинәйҙәре менән сәй эсәндән һуң, Зәкирә Ҡәҙербаева башҡарыуында хәҙистәр тыңланыҡ. Бына шуларҙың береһе:

*Мөхәммәттең асыуы ҡаты булған,*
*Эскеләккә, яман сир-бәләгә,*
*Хәмер шараптарға ҡулы тейгән*
*Ошо ун кешене ҡәһәрләгән:*
*Кешеләргә шарап эшләүсене,*
*Үҙе эшләп үҙе эсеүсене,*
*Үҙе һатып алып эсеүсене,*
*Башҡаларға ҡойоп биреүсене,*
*Хәмер-шарап ташып йөрөүсене,*
*Шул шарапты ҡабул ҡылыусыны,*
*Һатыусыны, алыусыны,*
*Араҡыны бүләк итеүсене,*
*Хәмер һатып, ашап туйыусыны...*

Ошондай хәҙистәр һөйләнә хәҙер Мерәҫ ауылы халҡы, йәштәре, балалары алдында. Ә тыңлаусыларға был аҡыллы һүҙҙәр оҡшай. Аҡыллы һүҙҙе тыңлаусылар бар икән, ауылдың киләсәге лә бар, тимәк.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# АҠЫЛ ТИРӘБЕҘ...

**"Киске Өфө" гәзитен яратып уҡыйым һәм йыл да алдырмайынса ҡалмайым. Сөнки ул яҡын дуҫ та, кәңәшсе лә, яҡтылыҡ өләшеүсе лә.**

Ниндәй рубрикалар оҡшай? "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһын алайыҡ. Ундағы сығыштарҙан көн ҡаҙағына ҡағылышлы мәсьәләләргә, бөгөнгө көндөң актуаль проблемаларына ҡарата халыҡтың уй-фекерен белергә була. Әхмәр Үтәбайҙың "Милли идеяға торош" рубрикаһындағы фекерҙәрен уҡып, уның ниндәй киң белемгә эйә булған журналист икәнен күреп һоҡланаһың. Һәр сығышында ул бер елле генә фекер ҙә ташлап, гәзит уҡыусыларҙы уйланырға, фекерләргә мәжбүр итә. "Әйҙә, аҡса эшләйек" тигән рубриканы ла яратып уҡыйым, сөнки хәҙер баҙар иҡтисады заманында һәр кем тырышырға, аҡса эшләүҙең төрлө юлдарын эҙләргә тейеш. Намыҫлы аҡса эшләүҙең бер ояты ла юҡ, өс тинлек эш ҡаһына ғына ышанып, ҡул ҡаушырып ултырыу оят булырға тейеш ҡул-аяғы имен кешегә.

Гәзиттең "Йәштәр ҡоро" рубрикаһы ла бик оҡшай миңә. Төрлө һөнәр, белем алған, төрлө яҡтан килгән йәштәр берәй проблема буйынса фекер алыша, бәхәсләшә икән, тимәк, уларға өмөт бар. "Бәхәстә хәҡиҡәт тыуа", тип дөрөҫ әйтәләр бит. Йәштәребеҙ бөгөнгө заман ҡуйған һорауҙарға яуап эҙләй, ауырлыҡтарҙан сығыу юлдарын табырға тырыша, тимәк.

Илдар Ғәбитовтың кроссвордтары ла күңелгә йыуаныс. Рәхәтләнеп үҙебеҙсә, башҡортса, башватҡыстар, башҡатырғыстар сисәбеҙ. Был авторға бик тә рәхмәтлебеҙ. Ә гәзиттәге иң-иң яратҡан рубрика, әлбиттә, "Аҡыл-ҡаҙна" баганаһы. Шул рубрикалағы аҡыллы фекерҙәрҙе йыйып, бер китап сығарырға, ундағы аҡылды, тәжрибәне күберәк халыҡҡа еткерергә кәрәк, тигән тәҡдимем дә бар. Ҡыҫҡаһы, "Киске Өфө"гәзитенең һәр битенән, һәр рубрикаһынан аҡыл тирәбеҙ.

**Әлфиә ЗӘБДИНОВА.**

*ВӘЛИДИ ХАҠЫНДА ҺҮҘ*

**Әхмәтзәки Вәлиди тураһындағы иҫтәлектәрҙе тыуған илгә ҡайтарыу өсөн күп көс һалған шәхесебеҙ, философия фәндәре кандидаты Әмир ЮЛДАШБАЕВ менән "Вәлиди хаҡында һүҙ" рубрикаһы аҫтында алып барылған әңгәмәләребеҙҙе дауам итәбеҙ.**

# АҠТАМЫРҘАЙ ХАЛҠЫБЫҘ...

## Икенсе һүҙ: "Үҙе менән Ҡарамышевтарҙың да рухын алып ҡайтты..."



**Һорау: Вәлиди шәхесе, һәр бер бөйөк инсандыҡы кеүек, ҡапма-ҡаршылыҡлы нарыҡлауҙан азат түгел. Хатта үҙебеҙҙең башҡорт зыялылары араһында ла икенсел фекер бар. Йәнәһе, ул илде болғатҡан да, халҡын ут эсендә ҡалдырып, сит илгә ҡасып киткән. Шул уҡ ваҡытта Салауат батырҙың халыҡ йөрәгендә үлемһеҙ булыуын уның халҡы менән аҙаҡҡаса ғазап сигеүендә лә күрәбеҙ. Ошо турала уйлағанығыҙ бармы?**

- Быңдай һүҙҙәр элегерәк ғалим хаҡында бик аҙ белгән саҡта һөйләнелде. 20-се йылдарҙан алып 80-се йылдар аҙағына тиклем бер туҡтауһыҙ "валидовщина" бөтә тарихи китаптарҙа, мәҡәләләрҙә, сәйәси документтарҙа ҡәһәрләнде. Ләкин ғалимдың үҙе, хеҙмәттәре хаҡында аҙ ғына булһа ла объектив мәғлүмәт табыу мөмкин түгел ине. Хәҙер уның байтаҡ хеҙмәте, уның хаҡында яҙылған бер нисә китап һәм байтаҡ мәҡәләләр нәшер ителгәндән һуң, быңдай фекерҙәргә урын ҡалмай кеүек. Вәлиди Мәскәүҙәге яуаплы вазифаһын ташлап, көрәште дауам итер өсөн китә. Үҙе, шәхси тыныслығы, тормош уңайлығы хаҡында ғына уйлаһа, Мәскәүҙә ҡалып ҡына йәшәр ине. Бик булмаһа, сәйәсәттән алыҫлашып, фән менән генә шөғөлләнеү форсатын эҙләр ине. Әле ул саҡта большевиктарҙың үҙүҙҙәренә, көрәштәштәренә, иптәштәренә ҡарата ла тоталь репрессиялар юлына баҫырын совет етәкселәре белмәй ине бит. Башҡортостанда ысын мәғәнәһендәге автономияға ваҡытлыса, бер генә йылға булһа ла өлгәшкән Әхмәтзәки Вәлиди ошо уҡ маҡсат менән бөтә Урта Азияны күтәрергә өмөтләнә. Ундағы зыялыларға көрәш юлдарын, ысулдарын, маҡсаттарын аңлатырға теләй һәм тормош-көнкүреш шарттары бик түбән булған сүл, тау-таш араһына юлға сыға. Һирәк осрай торған тәүәккәллек. Артынан халҡына фиҙаҡәр хеҙмәт иткән байтаҡ йәштәр эйәрә. Улар тағы ла күберәк булыр ине, ғалим башҡаларына илдә ҡалырға ҡуша. Ил ағаһы кеүек фекер йөрөтә. Ул саҡта Вәлидигә әле 30 йәш тә тулмаған була, йәғни Салауаттан әллә ни өлкән дә булмай.

Әгәр ҙә ғалим Урта Азияға китеп, ундағы милли хәрәкәттә ҡатнашырға баҙнат итмәһә, бының Башҡортостан һәм башҡорт халҡы өсөн бер нисә бик насар һөҙөмтәһе булыр ине. Беренсенән, Әхмәтзәки Вәлиди 30-сы йылдарҙа совет төрмәһендә һәләк ителеүселәрҙең иң тәүгеләре сафында булып, был уны милли хәрәкәттең бөйөк юлбашсыһы сифатында лайыҡлы баһалау мөмкинлеген тамырҙан юҡ итәсәк ине. Ул эмиграцияла мәшһүр ғалим булып, бөтә донъяға танылыуы менән дә йәш ваҡытта үҙе башҡарған эштәренең ҡиммәтен арттырҙы. Улай ғына ла түгел, халҡыбыҙҙың дөйөм хәрәкәтенә ҙур абруй өҫтәне. Ул осорҙағы милли тарихыбыҙҙы кесерәйтеп, ваҡ-төйәккә ҡалдырып, боҙоп-йыртып күрһәтергә теләүселәр совет осоронда ғына түгел, хәҙер ҙә табылып тора. Фән донъяһы ла уның тарихи асыштарынан, бөйөк хеҙмәттәренән мәхрүм булыр ине. Мәҫәлән, Ибн Фаҙландың Мәшхәдтәге китабын башҡа берәһе табып, донъяға сығарыр ине, тигән өмөт тормошҡа ашыр инеме? Быға ышаныслы рәүештә ыңғай яуап бирергә һис тә нигеҙ юҡ. Айырыуса Шәреҡ илдәрендә күпме ҡиммәтле сығанаҡтар эҙһеҙ юғалды. Ә. Вәлидиҙең Әль Бируни хаҡындағы әҫәрҙәрен шул уҡ кимәлдә тағы кем яҙыр ине? Ғалимдың быңдай асыш-ҡаҙаныштары бик күп һәм улар беҙҙең өсөн ҙур ғорурлыҡ һанала.

Күреп тораһығыҙ, инҡилаптар заманында Вәлиди кеүек үҙ халҡына фиҙаҡәр хеҙмәт иткән күптәрҙең яҙмышы әле булһа ярым-йорто ғына билдәле. Һәйкәлдәр ҡуйырлыҡ Ә. Ҡарамышев, С. Мағазов, Усман һәм Хәлил Тереғоловтар кеүек тиҫтәләрсә шәхестәр хаҡында йүнләп бер ни белмәйбеҙ. "Йәшлек" гәзитендә Нуриәғзәм Таһиров хаҡында уның улының йән өшөткөс, йөрәк һыҙландырғыс мәҡәләһе сыҡты. Әгәр ҙә Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр"ендә был аҫыл егеттәребеҙ хаҡында яҙмаһа, шул килеш йәшәүебеҙҙе дауам итер инек.

Был тәңгәлдә Иҫәнбикә ханымдың бер һүҙе бик фәһемле. Ғалим "Хәтирәләр"ен яҙып бөткәндән һуң уны бер күренекле Америка ғалимына уҡырға бирә. Ул уны уҡып сыҡҡандан һуң: "Зәки бей, әҫәрегеҙ бик фәһемле һәм мөһим, ләкин унда артыҡ күп кешеләрҙең исемдәрен телгә алғанһығыҙ, үҙегеҙ хаҡында күберәк яҙһағыҙ, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине", - тигән фекер белдерә. "Хәтирәләр"ҙең икенсе, тулыландырылған вариантында исемдәр тағы ла арта һәм беренсеһенә ҡарағанда ике тапҡыр самаһы килеп сыға. Был бик тәрән мәғәнәгә эйә. Тарихты "халыҡ массалары" һәм уларҙы көтөүе менән эйәртеп йөрөгән даһиҙар түгел, шәхестәр барлыҡҡа килтерә һәм уларҙы онотмау, тейешле баһаһын биреү ул кешеләрҙең балаларының, туғандарының ғына түгел, киләһе быуындарҙың изге бурысы. Тарихсы ғалим үткән дәһшәтле ваҡиғаларҙа үҙенең шәхси роле ни тиклем мөһим булһа ла, көрәштәштәренең, фекерҙәштәренең роле хәл иткес әһәмиәткә эйә булыуын аңлай һәм уларҙың исеме, башҡарған эштәре хаҡында мөмкин тиклем тулы мәғлүмәт ҡалдырырға ынтыла. Ул шуныһын да аңлай: Вәлиди теле менән әйтелгән, ҡулы менән яҙылған һүҙ тос. Вәлиди әйтеп тә, беҙ Ә.Ҡарамышев, С. Мағазов кеүектәрҙе баһалай алмайбыҙ икән, был инде беҙҙең ғәйеп. Ғалим үҙ бурысын үтәгән, яуаплылыҡ уның иңенән төшөп, беҙҙең муйынға эленгән.

Вәлиди инҡилаптар дәүерендә Башҡортостандың данлыҡлы тарихи дәүерен барлыҡҡа килтереү менән дан ҡаҙанһа, етмешенсе йылдарҙа был тарихты халыҡ хәтерендә яңынан тергеҙеү эшендә лә иң ҡеүәтле этәргес көс булды. Ул үҙенең "Хәтирәләр"е менән иленә бер үҙе генә түгел, бөтә арҡаҙаштарының, күптәрҙең ата-олаталарының, туғандарының рухтарын эйәртеп алып ҡайтты ла, халыҡ араһына таратты. Мин үҙем был хәлде шулай күҙ алдына килтерәм. Тойғон Таһиров кеүек, атаһының рухына тоғро, аңлы кешеләрҙе, бөтә халыҡты яңы хәрәкәткә килтерҙе ул. Америка ғалимының фекеренән тағы ла тәрәнерәк хәҡиҡәт сығара Вәлиди аҡылы. Уның башҡарған эштәре, ижад иткән әҫәрҙәре йәштәр өсөн үрнәк һәм киләсәккә өмөт сығанағы.

Салауат Юлаев менән Әхмәтзәки Вәлидиҙе сағыштырыуға мин дә нигеҙ бар тип уйлайым. Так айырма шунда: Салауатҡа ситтә үҙ яҙмышы һәм халыҡ мәнфәғәте өсөн көрәшергә бер ниндәй ҙә форсат булмаған тәҡдирҙә, Вәлидигә быңдай мөмкинселек насип була һәм ул был форсаттан ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем файҙалана.

Донъяға киң билдәле ғилми хеҙмәттәре, иң абруйлы фәнни конференцияларҙа ойоштороусы, почетлы рәйес сифатында ҡатнашыусы, байтаҡ университеттарҙың почетлы докторы булып танылыуы менән Әхмәтзәки Вәлиди исеме һәм мираҫы халҡыбыҙҙың рухи хазинаһына әүерелде. Тик үҙебеҙҙең зыялылар, халыҡ быны аңлай белеү кимәленә күтәрелергә тейеш.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ әҙерләне.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы

Урманһыҙ ерҙә көн күреүсе башҡорттар көнкүрештә ағасты бик һирәк осраҡта ҡулланған. Торлаҡ эшләү өсөн уларға ҙур булмаған ағастар ҙа еткән, һауыт-һаба башҡа материалдарҙан яһалған, ә яғыу өсөн ваҡ ҡыуаҡлыҡтар һәм хайуан тиҙәге ҡулланылған. Ағастан нимәлер яһау өсөн яҡшы бысаҡ, бик һирәк осраҡтарҙа балта ла еткән. Ағас эшкәртеү менән башлыса урманлы ерҙә йәшәүсе башҡорттар шөғөлләнгән.

Ағасты ябай тимер балта менән йыҡҡандар, бары тик Урал тауҙарында ҙурыраҡ балталар булған, мәҫәлән, бөрйәндәр уны һарпаҡ тип йөрөткән. Ағасты бер яҡтан уртаһына тиклем сапҡас, ҡаршы яҡтан саҡ ҡына өҫтәнерәк тағы ла 20-30 см (ағастың йыуанлығына ҡарап) сабылған. Ботаҡтарынан таҙартылған ағасты тотошлай йәки бер нисә өлөшкә бүлеп, йорт һалына торған ергә ҡышын алып ҡайтҡандар. Әгәр ҙә ағас утын өсөн тәғәйенләнһә, уны махсус ҡоролма менән дүрт өлөшкә бүлгәндәр, һуңынан тураҡлағандар. Кипкән ағастарҙан таҡта яһағандар, улар ваҡытлыса торлаҡ яһау, өй башын ябыу өсөн ҡулланылған. Таҡта балта, кәрәк икән, үҙенсәлекле йышҡылар менән шымартылған. Башҡорттарҙа йышҡы ике төрлө булған. Уларҙың ҡубаға тип йөрөтөлгәне һайғау һәм ҡолғалар, ә икенсеһе бүрәнә йышыу өсөн тотонолған. Ҡубаға - ағас пластинанан яһала, аҫтына бысаҡ ҡуйыу өсөн махсус уйымдары бар (**һүрәт**). Ул диаметры ҙур булмаған ҡолғалар йышыу өсөн ҡулланыла. Икенсеһе, бүрәнә йышыу өсөн



тәғәйенләнгәне, тимер пластинанан, уның остары бер аҙ өҫкә ҡарай бөгөлгән, ағастан яһалған тотҡаһы бар.

Ағасты соҡоу өсөн аталғы, сапҡы, йышҡы тип аталған махсус ҡоралдар ҙа бар (**һүрәт, *а* - сапҡы, *б* - йышҡы, *в* - аталғы**). Ҡалаҡ кеүек нескә эш талап ителгән әйберҙәрҙе төрлө ҙурлыҡтағы бысаҡ-юнғыстар менән эшләгәндәр (**һүрәт юнғыс**).





Ағастан яһалған һауыт-һаба ике төркөмгә бүленә - тотош, бер киҫәктән торған һәм махсус ҡуйылған өлөштәре булған һауыттар. Иң ҙур һәм яһалышы буйынса ябай һауыттар булып сара һәм табаҡ иҫәпләнә (**һүрәт сара һәм табаҡ**). Сара - киң һәм һай һауыт, бары тик Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында ғына осрай. Табаҡ тип ҙур ағас һауытҡа әйтәләр, уның диаметры 50 см, ситендә элеп ҡуйыу өсөн ҡолағы бар. Туҫтаҡ һәм тәгәс тип аталған ағас һауыттар башҡорттарҙа киң таралған, уларҙан бәләкәсерәк һауытты сүгәтә тип йөрөтәләр. Ҙур булмаған тотҡаһы булған ағас һауыт - алдыр тип атала (**һүрәт, *а* - бал һауыты, *б* - алдыр**). Был һауыттар сифатлы ағастың ороһонан, һирәгерәк ҡарағай һәм ҡайын тамырынан яһала. Туҫтаҡ һәм тәгәстәр бик юғары баһаланған, уларҙы ҡымыҙ йәки әсе бал әсетеү өсөн ҡулланғандар. Алдыр, ижау кеүек үк, ҡымыҙ һәм әсе балды ҡойоу өсөн файҙаланылған.





✓ *Әле бына Хәйбулла районы карьерҙарынан күпме байлыҡты ситкә оҙатабыҙ. Ҡыҫҡаһы, беҙ үҙебеҙҙең байлыҡты ситтәрҙе байытыр өсөн оҙатабыҙ, үҙебеҙгә бысранған ер, һауа, тәрән-тәрән соҡорҙар ғына тороп ҡала.*



# ИРӘНДЕККӘЙ АЛТЫН

## Шул йөҙөккә

**Тулҡын-тулҡын булып йәйрәп ятҡан**
**Күк тауҙарҙың күрке таш икән.**
**Ирәндеккәй алтын йөҙөк булһа,**
**Шул йөҙөккә Баймаҡ ҡаш икән.**
**Ымһынмаған икән был йөҙөккә**
**Кемдең генә кәкре бармағы.**
**Ете диңгеҙ аша - байымаҡҡа -**
**Инглиз дә һалған ҡармағын.**
**Килмешәктәр булған төрлө-төрлө,**
**Талаусылар булған бер көтөү.**
**Тик Ирәндек -**
**Мәңге өйрәндек бит -**
**Яуға сөйҙө сая бөркөтөн.**
**Бөгөн инде бына һәр кем әйтер:**
**"Бәхет серен асып өйрәндек".**
**Алтын ҡулы менән бәхет сәсеп,**
**Бәхет урыр мәңге Ирәндек!**

**Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов үҙенең 1964 йылда яҙған ошо "Йөҙөк ҡашы" тигән шиғырын Баймаҡтың йөҙ йыллығына бағышлаған. Урынлы һорау тыуа: улайһа, ниңә быйыл баймаҡтар ҡаланың 75 йыллығын байрам итергә йөрөй һуң? Тарих төпкөлөнә төшә башлаһаҡ, ҡаланың йорт старшинаһы Баймаҡ Бикбулатов хөрмәтенә уның исемен йөрөткән ауылдың нигеҙендә үҫеп сығыуына, тағы ла тәрәнгәрәк төшһәк, Баймаҡ Бикбулатовтың (атаһы Бикбулат Әликәсов) ҡартатаһы Әликәс Һөйөндөковтың 1755 йылғы башҡорт ихтилалын етәкләгән йылдарға барып юлығырбыҙ. Ихтилал ваҡытындағы Әликәс ауылы хәҙер Буранбай исемен (уға тиклем Иҫке Кинйәбулат) йөрөтә. Ошоларға Буранбай Ҡотосовтың атаһы менән Әликәс Һөйөндөктөң бер туған булыуҙарын өҫтәһәк, офоҡтарыбыҙ тағы ла киңәйеп китә.**
**Баймаҡ ҡалаһының бөгөнгө йөҙө ниндәй? Ул элекке ауыл булған хәленән ниндәй үҙгәрештәр кисергән? Ҡаланың барлыҡҡа килеүе төбәк халҡының тормош-көнкүрешендә ниндәй сағылыш тапҡан? Ҡаланың киләсәге нисек күҙаллана? Ошо һәм башҡа һорауҙарға Баймаҡ район хакимиәте башлығы Илшат Хәмит улы СИТДЫҠОВ менән ҡорған әңгәмәлә яуаптар табырһығыҙ.**

**‣ Баймаҡ ҡалаһы 1938 йылда эшселәр ҡасабаһы нигеҙендә барлыҡҡа килә. Бер үк ваҡытта ҡаланың барлыҡҡа килеүенә 1930 йылдың 20 авгусында шул уҡ исемдәге райондың ойошоуы нигеҙ булып тора. Әммә ҡаланың төҙөлөүен тик районға ғына бәйләп аңлатыу хәҡикәткә бер генә күҙ менән ҡарауға тиң булыр ине. Ни өсөн тигәндә, әйтәйек, бер үк ваҡытта тиерлек ойошҡан Әбйәлил районы үҙәге Аҫҡарҙың, Йылайыр районы үҙәге Йылайырҙың, Хәйбулла районы үҙәге Аҡъярҙың, Ейәнсура районы үҙәге Иҫәнғолдоң, Күгәрсен районы үҙәге Мораҡтың, Бөрйән районы үҙәге Иҫке Собханғолдоң һәм башҡаларҙың һаман да ҡасаба йә ауыл булып йөрөүе ҡала барлыҡҡа килеүенең төп шарты районға бәйле түгеллеген иҫбатлай. Ә Баймаҡ 1938 йылда уҡ ҡала статусын ала. Район һәм уның үҙәге булған ҡаланың бер үк исемде йөрөтөү миҫалы беҙҙә бихисап, әйтәйек, Стәрлетамаҡ ҡалаһы һәм районы, Белорет ҡалаһы һәм районы, Учалы ҡалаһы һәм районы, Ишембай ҡалаһы һәм районы, Мәләүез ҡалаһы һәм районы, Дүртөйлө ҡалаһы һәм районы, Яңауыл ҡалаһы һәм районы, Туймазы ҡалаһы һәм районы һ.б. Илшат Хәмит улы, һеҙ үҙегеҙ етәкләгән Баймаҡ районы миҫалынан сығып, ошо хәлгә ниндәй аңлатма бирер инегеҙ?**

- Әлбиттә, ауыл хужалығы районы барлыҡҡа килеү менән уның үҙәгендә төрлө тармаҡтар һәм өлкәләр буйынса идаралыҡтар, предприятиелар, хужалыҡтар, дәүләт кимәлендәге башҡа учреждениелар, ойошмалар, агентлыҡтар, уларҙың конторалары, офистары үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә. Шулай уҡ мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт учреждениелары селтәре лә үҙәктә формалаша. Әммә былар ғына ҡала һынлы ҡаланың формалашыуына етмәй, минеңсә. Ә Баймаҡҡа килгәндә, был ҡала буп-буш урында ғына барлыҡҡа килмәгән. Тарихтан билдәле булыуынса, был төбәк элек-электән алтын-көмөшкә-баҡырға, бер һүҙ менән әйткәндә, Менделеев таблицаһына ингән барлыҡ файҙалы ҡаҙылмаларға тиерлек ифрат бай булған. XIX быуатта уҡ Баймаҡ барлыҡ донъя капиталистарының иғтибар үҙәгендә булған. Кемдәр генә ынтылмаған был ерҙәргә, американлыһы ла, инглизе лә, башҡаһы ла. Ул ваҡытта "Баймаҡ" тип аталған оло программа төҙөлгән. Уның буйынса, хәҙерге Учалы, Хәйбулла, Сибай тирәһендәге барлыҡ ятҡылыҡтарҙы ошо программа нигеҙендә үҙләштереү күҙ уңында тотолған. Ул программала ертау эшендә хеҙмәт башҡарған ир-аттарҙың ҡатындарын, башҡа ғаилә ағзаларын ниндәйҙер хеҙмәткә йәлеп итеү мәсьәләһе лә ҡаралған хатта. Программа социаль-мәҙәни яҡтан да уйланған булған. Хәҙергесә термин менән әйткәндә, был төбәктең ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтарын эшкәртеү өсөн сит ил капиталистары инвестор булып сығыш яһарға теләк белдергән булған. Инглиздәр Баймаҡта "Көньяҡ Урал тау акционер йәмғиәте" компанияһы төҙөгән.

Баймаҡтың шул уҡ исемдәге район ойошҡандың һигеҙенсе йылында уҡ ҡала булып китеүендә, шулай итеп, руда сәнәғәте үҫешеүе мөһим роль уйнаған. Һеҙ юғарыла телгә алған Стәрлетамаҡ, Белорет, Учалы, Ишембай, Мәләүез, Дүртөйлө, Яңауыл, Туймазы миҫалдарында ла районлар менән бер рәттән, ҡалаларҙың формалашыуы шулай уҡ тау, нефть, газ, машиналар төҙөү сәнәғәтенә бәйле.

**‣ Сит ил капиталистары ул ваҡытта бында табылған ҡаҙылма байлыҡтарҙы ни рәүешле итеп эшкәртергә уйланы икән? Сөнки был төбәктә, белеүебеҙсә, Демидов домналары булмаған. Ситкә ташыған осраҡта ла, ул саҡта хәҙерге кеүек, тауар поездары, юлдар булмаған, төбәктә диңгеҙ булмауы һыу юлы менән сығарыу мөмкинлеген сикләгән. Йөҙәр-йөҙәр саҡрымдарға ат арбаһына тейәп, рудалар ташып булмай бит инде. Был - мәғәнәһеҙлек. Был проблеманы нисек хәл итергә уйлаған икән ул капиталистар?**

- Һорау бик ҡыҙыҡ һәм урынлы. Дөрөҫ әйтәһегеҙ, ул ваҡытта ер аҫтынан сыҡҡан руданы эшкәртә торған ергә тиклем ташыу иң ҙур проблема булып торған. Был - транспорт мәсьәләһе. Элегерәк Баймаҡ руда ятҡылыҡтары Преображенский, Канikольский баҡыр иретеү заводтарына сеймал рәүешендә файҙаланылған. Әммә 1755 йылғы ихтилалда был заводтар яндырыла. Унан һуңғы осорҙа инде руданы тулыһынса урында эшкәртеү мәсьәләһе лә ҡуйылған. Был беҙҙең хәҙерге ваҡыттағы оло хыялыбыҙ. Бөгөн иһә беҙ ҡаҙылма байлыҡтарыбыҙҙы сеймал итеп Силәбегә, Екатеринбургҡа тимер юлы аша оҙатабыҙ.



*Закон буйынса беҙ быйылдан өс балалы ғаиләләргә йорт һалыр өсөн бушлай ер бирергә тейешбеҙ. Ауылдағы шундай ғаиләләрҙең күбеһе Баймаҡҡа ынтыла. Шул уҡ ваҡытта Баймаҡ ҡалаһының үҙендә генә бындай ғаиләләрҙең һаны өс йөҙҙән ашыу. Бөгөн ҡаланың "Көньяҡ" ҡасабаһында 1200 ғаиләгә ер бирелде лә инде. Дөрөҫөн әйткәндә, ул яҡта айырым ҡала үҫеп килә. Уларға газ, электр энергияһы, юл үткәреү өсөн йыл һайын 30 миллионға яҡын аҡса бүлеп торабыҙ. Унда мәктәп, балалар баҡсаһы, магазиндар бинаһы ҡалҡып сығасаҡ. Ә бейегәйеүгә килгәндә инде, Салауат Юлаев проспектындағы иҫке өйҙәрҙе һүтеп, уларҙың урынына күп ҡатлы йорттар һалырға иҫәп тотабыҙ. Әле Баймаҡта бындай типтағы алты йорт төҙөлөп ята, былтыр ике йортто файҙаланыуға тапшырғайныҡ. "Иҫке йорт" программаһы буйынса быйыл 168 ғаилә яңы фатир алды.*

**‣ Парадоксаль хәл-күренеш тураһында һөйләшәбеҙ түгелме, Илшат Хәмит улы? Беҙ бөгөн төбәккә килеп, ниндәйҙер ҡаҙылма байлыҡ, ауыл хужалығы продукцияһы эшкәртеүсе предприятие төҙөп биреүсе инвесторҙы эҙләйбеҙ, республикабыҙ Президенты ла ошо хаҡта туҡтауһыҙ ҡабатлай. Был мәсьәләләребеҙ үткән быуаттарҙа уҡ ыңғай яҡҡа хәл ителеү йүнәлеше алған булған да, 1917 йыл быға ҡамасаулаған түгелме һуң?**

- Беҙ шундай-шундай тарихи ваҡиғаларҙың шаһиты ғынабыҙ. Был хәлде аңлау менән генә хәлдәребеҙ яҡшырып китмәҫ. "Баймаҡ" программаһын Октябрь инҡилабы юҡҡа сығарған. Үкенескә күрәме, әллә бәхеткә күрәме, был һорауға яуапты әлегә бирә алмайбыҙ. Мин бөгөн бер нәмәне аңлап бөтмәйем: запастарыбыҙ әле бар кеүек, әммә ул байлыҡтарҙың урындағы халыҡ мәнфәғәтендәге перспективаһы нисек булыры билдәһеҙ. Әле бына Хәйбулла районы карьерҙарынан күпме байлыҡты ситкә оҙатабыҙ. Ҡыҫҡаһы, беҙ үҙебеҙҙең байлыҡты ситтәрҙе байытыр өсөн оҙатабыҙ, үҙебеҙгә бысранған ер, һауа, тәрән-тәрән соҡорҙар ғына тороп ҡала. Әлбиттә, закон буйынса, ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтары федераль милек иҫәпләнә, ә бында йәшәүсе халыҡ та бит шул уҡ федераль дәүләт граждандары булып тора.

Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың инвесторҙар зарурлығы хаҡындағы һүҙҙәре лә үҙебеҙҙең байлыҡты, ер аҫты ҡаҙылмаларын, ауыл хужалығы продукцияһын киләсәктә күберәк урындағы халыҡтың йәшәү кимәлен күтәреүгә йүнәлтергә өйрәнергә тейеш булыуыбыҙҙы аңлата тип уйлайым. Элек беҙ байлығыбыҙҙы ҡарап тормайынса, күп итеп тәләфләгәнбеҙ. Хәҙер инде экологиябыҙға зыянһыҙ кимәлдә уны үҙебеҙгә эшкәртеп өйрәнергә ваҡыт. Ә был эште хәҙерге заманда инвесторһыҙ атҡарып сығыу мөмкин дә түгелдер.

**‣ Әйтәйек, 50-се йылдарҙағы Баймаҡ ҡалаһын нисегерәк итеп күҙ алдына баҫтырырға мөмкин булыр ине?**

- Баймаҡ ҡалаһы һәр ваҡыт хәҙерге рәүешендә булмаған, уның төрлө саҡтары булған. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: 50-се йылдарҙа Өфөнән Баймаҡҡа "кукурузник" самолеты килеп төшә. Ул ваҡытта асфальт юлдар, ҡатлы йорттар юҡ, кешеләрҙең күбеһе землянкаларҙа көн күрә. Самолет тауышын ишетеп, землянкаһынан килеп сыҡҡан шахтер "тимер ҡошҡа" ҡыҙыҡһынып ҡарап тора. Ҡала урамында һанда-һаяҡ йөк машиналары күренеп ҡала. Уның ҡарауы, атлылар күп була. Ғөмүмән, ҡаланың дүрт тарафынан да баҙарға йә башҡа йомош менән килеүсе арба егелгән аттар килеп-китеп тора...

**‣ Шулай ҙа райондың һәм ҡаланың барлыҡҡа килеүе ошо төбәк халҡына нимә бирҙе, тип иҫәпләйһегеҙ? Ололар һөйләүе буйынса, был яҡ ауылдарында йәшәүселәр элек-электән, хат-**

**та һеҙ әйткән "Баймаҡ" программаһына тиклем дә, тик бер мал көсө менән генә көн итмәгән. Беҙҙең ҡарттатайҙар электәлектән тимер иретеү, алтын йыуыу серҙәрен белгән, күрше ҡаҙаҡтар араһына китеп тә көсеп иткән, һатыу менән шөғөлләнгән. Минеңсә, Баймаҡ районының формалашыуы колхоздар эшен йәнләндереһә, Баймаҡ ҡалаһының барлыҡҡа килеүе тау эшенә маһирҙарҙы район үҙәгенә тартҡандыр.**

- Тап шулай. Ҡала барлыҡҡа килгәс, күптәр ауылдан Баймаҡҡа күсеп килгән. Шуға күрә хәҙер Баймаҡта йәшәүселәрҙең барыһының да тиерлек тамырҙары, туғандары ауылда. Ә ҡалаға килгәндә инде, ҡайҙа ҡала, унда етештереү, эшкәртеү сәнәғәте, ҡайҙа сәнәғәт, унда эш урыны, махсус йә юғары белем талап иткән юғары етештереүсәнле хеҙмәт, ҡайҙа юғары етештереүсәнле хеҙмәт, унда юғары эш хаҡы, ҡайҙа юғары эш хаҡы, унда социаль шарттарҙы яҡшыртыу мөмкинлеге, ҡайҙа яҡшы социаль шарттар, унда юғары мәҙәниәтле мөнәсәбәт, ҡайҙа юғары мәҙәниәтле мөнәсәбәт, унда юғары сәнғәт. Ҡаланың башҡа күп төрлө ынғай яҡтарын һанап үтергә мөмбарлығы 40 тонна алтын оҙатыла. 1960 йылға ҡала тибындағы ҡасабаның халҡы 10 мең кешегә етә, шул уҡ ваҡытта алтын запаҫы кәмеү арҡаһында Түбә бегун фабрикаһы профилен үҙгәртә, ҡасаба кире ауыл тип аталып йөрөтөлә башлай. Минеңсә, Түбәнең район үҙәге булып китмәүенең сәбәбе Талҡаҫҡа бәйле түгелдер. Сөнки Талҡаҫ санаторийы 1931 йылда төҙөлһә лә, күл бары 1978 йылда ғына закон тарафынан һаҡлана торған тәбиғәт ҡомартҡыһы тип иғлан ителә. Бында, бәлки, ҡала ойоштороусы предприятие булараҡ, Түбәлә бындай берәмектең берәү генә булыуы ҡамасаулағандыр. Ә Баймаҡ 1938 йылда район әһәмиәтендәге ҡала итеп иғлан ителгәндә уның составына Иҙелбай ауылынан тыш, алтын йыуыусы рудниктары булған Ерекле, Байҡара ауылдары инә.

**▸ Ваҡытында партияның Баймаҡ район комитетында 1-се секретарь булып эшләгән Рәйес Имамовтың "Баймаҡ республикаһыҙ йәшәй ала, ә республика Баймаҡһыҙ йәшәй аламы икән?" тип әйткән киң билдәле һүҙҙәре бар. Был һүҙҙәргә хәҙерге көн күҙлегенән**

**▸ Баймаҡтың 75 йыллығына атап, тағы ла ниндәйерәк төҙөлөштәр алып барыла, әҙер булғандарынан ниндәйҙәрен әйтеп үтер инегеҙ?**

- Физкультура-һауыҡтырыу комплексы эшләй башланы ла инде. Әле ҡышҡы осорға стадион, никах теркәү йорто эшләп ятабыҙ. Баймаҡ ҡалаһында балалар баҡсалары етешмәй. Был яҡшы, тимәк, балалар күпләп тыуа. Әле бер балалар баҡсаһын төҙөп бөтөрҙөк, икенсеһен төҙөй башланыҡ. Компьютер томографияһы менән дауахана комплексы эшләй башланы.

Баймаҡ бөгөн замандан артта ҡалмайынса, барлыҡ яңы технологиялар рухында йәшәргә ынтыла. Мәскәүҙәнме, сит илдәнме, беҙгә килеп төшкән кеше үҙен цивилизациялы ҡалала итеп тойһон, беҙгә бармаҡ тертөп күрһәтмәһен өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырырға тырышабыҙ. Беҙ телевизор аша төрк мәндәрҙең нисек итеп үҙ илен, ҡаҙаҡтарҙың баш ҡалаһы Астананы төҙөкләндереүен ҡарайбыҙ. Әлбиттә, беҙ улар менән сағыштырғанда бөтөнләй башҡаса шарттарҙа йәшәйбеҙ, шулай ҙа бөтә төрлө байлыҡтарыбыҙ була тороп, беҙ үҙебеҙҙең көнкүреште яҡшыртыу әмәлен үҙетуристик маҡсаттарҙа файҙаланырҙар ине. Баймаҡҡа терәлеп торған Ирәндек тауын ҡаланың ял-спорт базаһы итеү йәһәтенән нимәләр эшләнәме? Оҙонлоғо йөҙҙәрсә саҡрымға һуҙылған был тауҙар теҙмәһе хәҙергә ваҡытта айыуҙар төйәге булып иҫәпләнә.**

- Эйе, беҙ Ирәндеккә терәлеп торабыҙ, тик тәүҙә ҡаланың эсен яйға һалырға кәрәк. Яр буйы зонаһын рәтләргә, быуаны таҙартырға кәрәк. Шулай ҙа Талҡаҫ янында тау саңғыһы базаһы эшләнек. Граф күленең ял итеү базаһын яйлап үҫтерәбеҙ. Йәй беҙ ул базаны пионер лагеры итеп файҙаланһаҡ, ҡыш унда халыҡҡа ял итергә мөмкинлек бирәбеҙ. Унда тау өйәбеҙ, ғаиләһе менән ял итеүселәр һәр ваҡыт була. Быйыл пионер лагеры өсөн 48 урынлыҡ заман талаптарына тап килгән корпус төҙөп ултырттыҡ. Быға тиклем ундағы корпустар ағастан ғына һалынғайны. Элек пионер лагерын сентябрҙә ябып, майҙа кире аса торғайныҡ. Хәҙер унда йыл әйләнәһенә ял итеү мөмкинлеге барлыҡҡа килде.

**▸ Һуңғы йылдарҙа ауылдарҙа колхоз-совхоздар юҡҡа сығыуы арҡаһында күп кенә йәштәр ҡалаларға, күбеһенсә район**

- Был ауыл хужалығы алға киткән илдәрҙә, бәлки, шулайҙыр. 13 процент ауыл халҡы ҡаланы туйындыра алһын өсөн, беренсенән, етештереү юғары кимәлдә булырға тейеш. Бының өсөн беҙ гектарынан 20-30 центнер түгел, 40-50 центнер иген алырға тейешбеҙ. Икенсенән, беҙҙең һауа шарттары бөтөнләй башҡаса. Өсөнсөнән, мал тотоп йәйләүҙә йә ауылда йәшәү беҙҙең ҡанға һеңгән. Мин Краснодарҙа, Европа илдәрендә булғаным бар. Уларҙа, ысынлап та, фермерҙар юғары күрһәткестәргә өлгәшә. Әммә улар дәүләт программаһы буйынса системалы эшмәкәрлек алып бара. Уларҙа фермерҙы дәүләт үҙенең ҡанат аҫтына алған, етештергән тауарҙарын һатыу менән дә дәүләт үҙе шөғөлләнә, ә беҙҙәкеләр аҡыл өйрәтергә генә килә. Австрияла, мәҫәлән, һөт аҙыҡтарын эшкәртеү дәүләт монополияһына ҡарай. Шулай булырға тейеш тә. Бер кемгә лә сер түгел, беҙ бөгөн үҙ көс түгеп үҫтереп алған игенебеҙҙе ҡайҙа һатырға белмәйбеҙ. Һөттө Ырымбурға ташыйбыҙ, сөнки ваҡытында Сибайҙағы һөт аҙыҡтарын эшкәртеү комбинатын һаҡлап ҡала алманыҡ. Ул завод эшләһә, бөгөн беҙ барлыҡ Рәсәйҙе туйындырып ятыр инек.

# ЙӨҘӨК БУЛҺА,

## Баймаҡ ҡаш икән…

кин булыр ине. Дөйөм алғанда, эшкәртеү, етештереү сәнәғәте ныҡ үҫешкән ҡалала тормош һәр йәһәттән алда бара. Халыҡтың ҡулында аҡса барлыҡҡа килеүе урындағы бюджетта социаль-мәҙәни шарттарҙы үҫтереү өсөн өҫтәмә сығанаҡтар барлыҡҡа килеүенә ишаралай. Элек Баймаҡта Тау техникумы, районда педучилище эшләгән, башҡа мәҙәниәт усаҡтары ҡалҡып сыҡҡан. Ошо рәүешле зыялыларҙың заманға ярашлы яңы быуыны формалашҡан. Тап шул осорҙа Баймаҡ ерлегендә үҫеп сыҡып, ошонда быуын нығытҡан шәхестәр һуңыраҡ республика, Урал аръяғы кимәлендә милли кадрҙар нигеҙен тәшкил итә.

**▸ Түбә ҡасабаһының район үҙәге булып китеү ихтималлығы ла булған тиҙәр. Әгәр ҙә был тормошҡа ашһа, бөгөн район Баймаҡ түгел, ә Түбә атамаһын йөрөтөүе лә мөмкин булғандыр. Ишетеүемсә, Түбәнең район үҙәгенә әүерелмәүенә унан 4 саҡрымдағы Талҡаҫ күле лә ҡамасаулаған, тиҙәр.**

- Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һәм унан һуң Түбә ҙур сәнәғәт үҙәге һаналған. Һибелмә алтын яткылығы урынындағы был ауыл 1914 йылда барлыҡҡа килә. Ауылда алтын йыуыусы Түбә бегун фабрикаһы эшләй башлай, башҡорт, урыҫ мәктәптәре, дауахана төҙөлә, янғын һүндереү хеҙмәте эшләй. Һуғыш ваҡытында Түбәнән Мәскәүгә

**ниндәй аңлатма бирә алаһығыҙ?**

- Үҙ заманына күрә, ул был һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйткәндер. Сөнки ул ваҡытта Баймаҡ районы республикала дәүләткә иң күп иген тапшырған райондарҙың береһе булды. Игендән дә ниндәйе бит әле, ҡаты бойҙай. Беҙҙә донъя кимәлендәге иң яҡшы бойҙай үҫһә лә, бойҙайыбыҙҙы он итеп һалдырырға йүнле тирмәнебеҙ ҙә булманы хатта. Рәйес Имамов ваҡытында беҙҙә машиналар төҙәү заводы ла эшләп тора ине. Республиканың төп халҡы булған башҡорттарҙың рухи кимәле буйынса ла Баймаҡ һәр ваҡыт юғары булды. Тап шул йылдарҙа, газ булмаһа ла, ауылдарҙа юл үткәрелә, автобустар йөрөтөлә башланы, урман эшкәртеү хужалығы йылдам эшләнә.

**▸ Киләсәктә Баймаҡ ҡалаһы халҡының һаны артһын, социаль хәле яҡшырһын өсөн ниндәй анығ перспективалар бар, тип иҫәпләйһегеҙ? Белеүебеҙсә, һәр бер ҡала мотлаҡ рәүештә, иң беренсе нәүбәттә сәнәғәт үҫеше нигеҙендә үҫешә, төҙөкләнә.**

- Машиналар эшләү заводына инвесторҙар килде, улар яңы цехтар асыу өҫтөндә. Улар әле кризис ситуацияла, әммә ҡул ҡаушырып ултырырға йыйынмайҙар. Күрһәткестәре буйынса улар былтырғыға ҡарағанда 18 процентҡа яҡшыраҡ эшләй. Был насар күрһәткес түгел.

беҙ күрергә бурыслы. Йәшәү шарттары йәш быуынды формалаштырыуҙа ифрат ҙур роль уйнай. Әле беҙ Салауат Юлаев паркы эшләп ятабыҙ. Бөгөн Баймаҡта йәшәүсе кеше иртәнсәк өйөнән сығып, йүгереү спорты менән дә шөғөлләнә алмай. Ә паркта иһә, был мөмкин. Беҙҙең йәштәр шаулы йәшлеге үтеп китеп, тормош ҡорғандан һуң, балалары тыуғас, тыныл ҡала. Күптәр тап шул саҡта эсеүгә бирелә, айырылышыуҙар башлана. Ә бит шаулы йәшлек ритмын дауам итер өсөн беҙҙең ҡалаға стадиондар, парктар етешмәй. Салауат Юлаев паркы тап ошо маҡсаттан сығып эшләнә лә инде. Паркта ғаиләләре менән барып, ял итеп, сәй эсеп ҡайтырлыҡ барлыҡ шарттар тыуҙырыласаҡ. Паркта хоккей, волейбол майҙансыҡтары, теннис корты, балалар һәм өлкәндәр өсөн спорт тренажерҙары ҡуйыласаҡ. Бөгөн беҙҙең йәштәр, урта быуын кешеләре эштән ҡайта ла, өйөнә ҡайтып, телевизор ҡарап, диванда ята. Ундай кешеләүсеш туҡталып ҡала.

**▸ Баш ҡалабыҙ Өфөләге Конгресс-холл бинаһының проект авторҙары архитекторҙар Киокадзу Араи менән Рәшит Муллагилдин Башҡортостан ҡалаларының уникаль ландшафты хаҡында һөйләгәйне. Өфөнөң ундай үҙенсәлеге шуға ҡайтып ҡала: ҡала бар яҡтан да йылғалар менән уратып алынған һәм йылғаларҙың арғы ярында әҙәм аяғы баҫмаған шырлыҡтарға һәм утрауҙарға барып эләгергә була. Уларҙың фекеренсә, сит илдәрҙә бындай мөмкинлектәрҙе һис шикһеҙ**

**үҙәктәренә күсенә башланы. Мин белгәндәрҙән генә күпме таныштарым, дуҫтарым, туғандарым Баймаҡта йорт һалды. Ситкә китмәгәндәре өсөн уларҙың был аҙымын хупларға һәм мөмкин булғанда ярҙам да итергә кәрәктер, тием. Был йәһәттән Баймаҡтың киңәйеү йә бейегәйеү мөмкинлектәре хаҡында нимәләр әйтерһегеҙ?**

- Закон буйынса беҙ быйылдан өс балалы ғаиләләргә йорт һалыр өсөн бушлай ер бирергә тейешбеҙ. Ауылдағы шундай ғаиләләрҙең күбеһе Баймаҡҡа ынтыла. Шул уҡ ваҡытта Баймаҡ ҡалаһының үҙендә генә бындай ғаиләләрҙең һаны өс йөҙҙән ашыу. Бөгөн ҡаланың "Көньяҡ" ҡасабаһында 1200 ғаиләгә ер бирелде лә инде. Дөрөҫөн әйткәндә, ул яҡта айырым ҡала үҫеп килә. Уларға газ, электр энергияһы, юл үткәреү өсөн йыл һайын 30 миллионға яҡын аҡса бүлеп торабыҙ. Унда мәктәп, балалар баҡсаһы, магазиндар бинаһары ҡалҡып сығасаҡ.

Ә бейегәйеүгә килгәндә инде, Салауат Юлаев проспектындағы иҫке өйҙәрҙе һүтеп, уларҙың урынына күп ҡатлы йорттар һалырға иҫәп тотабыҙ. Әле Баймаҡта бындай типтағы алты йорт төҙөлеп ята, былтыр ике йортто файҙаланыуға тапшырғайныҡ. "Иҫке йорт" программаһы буйынса быйыл 168 ғаилә яңы фатир алды.

**▸ Ауылдарҙа барлыҡ халыҡтың 13 проценты йәшәгән хәлдә лә, улар ҡаланы туйҙыра аласаҡ, тигән тенденция бар донъяла. Тимәк, киләсәктә ауылдарҙағы халыҡ кәмейәсәк, Баймаҡ ҙураясаҡ…**

**ШУЛАЙ ИТЕП…**

**Рәми Ғариповтың Баймаҡ хаҡындағы шиғыры менән башланған әңгәмәне ошо ерҙә тыуып үҫкән мәшһүр шағир Рәйес Түләковтың Баймаҡ хаҡындағы шиғыры менән тамамлағы килә. Был шиғыр Илшат Ситдыҡовтың һүҙҙәрен йомғаҡлау ҙа, Рәми ағайҙың шиғырына яуап булып та яңғырай.**

### Баймаҡҡа йыр

*Ҡаҙ ҡанатҡайҙары кеүек,*
*Офоҡтар ҡатлы-ҡатлы.*
*Был ерҙәр беҙгә әсәйҙәр,*
*Атайҙар аманаты.*

*Был ҡанатлы офоҡтарҙан*
*Кемдәр ҡанатланманы?*
*Ошонда инде талдарҙың*
*Ҡырҡҡанда ҡан тамғаны.*

*...Минең сабый биләмәмдә*
*Тәү күргән офоҡтарым.*
*Һинән ҡалкты минең тәүге*
*Ҡояшым, болоттарым.*

*Һинән ҡалҡып күренгәне*
*Юғалды һиңә боҫоп.*
*Ниндәй серҙәр һаҡлана һуң*
*Һинең ышыҡта, офоҡ?*

*...О, һиндәге ул йәйғорҙар,*
*Һиндәге һаҙағайҙар!..*
*Айыра бит беҙҙе хәҙер*
*Офоҡтар, йылдар, айҙар.*

*Һөйөнәм дә,*
*Көйөнәм дә*
*Һинән киткән мәлемә.*
*Мин бит мәңгегә китмәнем,-*
*Бер ҡайтырмын (мәңгегә).*

*...Ҡаҙ ҡанатҡайҙары кеүек*
*Офоҡтар ҡатлы-ҡатлы.*
*Был - Баймаҡ йөмһүриәте,*
*Был - Баймаҡ ҡағанаты!..*



**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Ир-аттан айырмалы, ҡатын-ҡыҙҙың тәбиғәте баҫҡыслы буйһоноусанлыҡты яратмаһа ла, баштараҡ "һин, һин" тигән йәренең тораҡ "мин, мин" тигән талаптарына күнеүгә риза була. Риза булмаһа - ул алйот.***



Тамара ҒӘНИЕВА

# КЕШЕ

## (Дилетант яҙмалары)

*Кешеләргә ҡарап ҡайғым арта,*
*Наҡыҫайҙы әҙәп, самалар.*
*Олимп тауына көтөү ебәргәндәр.*
*Зыяратта бесән сабалар.*
*Мостай Кәрим.*



### "Мөхәббәткә генә ышанам"

*Аҡ сирендәр ергә сәскә ҡоя,*
*Йондоҙ буранына оҡшаған.*
*Күп нәмәлә мин дә икеләнәм.*
*Мөхәббәткә генә ышанам,*
*Мөхәббәткә генә ышанам...*

Минең "Мөхәббәткә генә ышанам" исемле шиғырҙар йыйынтығым бар. Ул 2006 йылда донъя күрҙе. Уны Яҙыусылар союзы идаралығы Республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим итеп ҡарағайны. Комиссия ағзалары китапты лайыҡлы тип тапманы. Хәйер, китаптан былай, минең үҙемде яратманы буғай ул юғары мәҙәниәтле комиссия ағзалары. Улар шулай ҙа республикабыҙҙың данлыҡлы шәхестәре. Уларҙың зауҡына ҡарата икеләнеү белдереп, ижадымды яратыусыларҙың кәйефен төшөргөм, күңелдәрен ҡайтарғым килмәй. Шуны ғына әйтә алам: минең үҙем өсөн ул ағзалар араһында авторитет юҡ. Береһе-бер минән артыҡ эш ҡыйратҡаны юҡ әле.

Хәйер, һүҙем мөхәббәт хаҡында ине бит... Шиғыр китабымдың исемен "Мөхәббәткә генә ышанам" тип атағас, ысынлап та, мөхәббәт ҡоломо мин? Шул тойғонан башҡа инаныстарым юҡмы ни? Дөрөҫөн әйткәндә...

О, ул тойғо... Ул тойғонан мәхрүм булған, һине , бүтәндәр нисек ҡабул итеүгә ҡарамаҫтан, идеал, иң матур, иң аҡыллы, иң батыр, йәнә әллә ниндәй метафоралар менән нарыҡлаусы, быҒаса барлығын да белмәгән бер йәндең һиңә һоҡланыулы, хатта ки, табыныулы кисерештәренән баш әйләнеү хәсиәтен кисермәгән кеше бармы икән? Ғашиҡлыҡтың төп принцибы, уны нисек кенә мөхәббәт хаҡына үҙ-үҙеңде ҡорбан итеү тип аңлатмаһындар, шулай ҙа ғашиҡтарҙың бер-береһен "һин, тик һин, һин берәү һәм ҡабатланмаҫ" тиешеп инандырыуҙары ул. Ә кемдең берҙән-бер булғыһы килмәһен. Мөхәббәт ғәләмәтенә тарыр алдынан, яҡты донъяға килгән кеше, ярайһы ҡаршылыҡтырға, шәхсиәтен ҡабул итмәүгә, конфликттарға осрап өлгөргән була. Имештер, атаәсәһе уны аңламай, дуҫтары, класташтары... Ә ул !.. Бөтә шул икеләнеүҙәрҙе, әйләнә-тирәләге "ғәҙелһеҙлек", "баһалап бөтмәүсәнлектәрҙе" инҡар итеп, "һин, һин..." тип иҫбатлай һәм , һинең эсеңә йомолған, тышҡа сығарырға ҡыймаған амбицияларыңа ҡанат ҡуя. Һинең хаҡта шундай фекерҙә булған кешенән дә яҡшыраҡ әҙәмдең булыуы мөмкинме? Юҡ ,әлбиттә. Һәм һин үҙең дә уны идеаллаштыра башлайһың.

О, ул мөхәббәт тигәнең...Һин яртыаҡыл, ярым иҫәр хәлдә, күҙеңә аҡ-ҡара күренмәҫлек томанға сорналғанһың. Психикаһы ныҡлап ултырып бөтмәгән ҡайһы бер ғашиҡтар, был тәүге кисерештәр һуңғы һәм ҡабатланмаҫ тойғолор, тип уйлауҙан, мөхәббәт яуапһыҙ булып сыҡһа, үҙ-үҙенә ҡул һалыуға барып етә. Их, яңылышалар! Ярамай! Түҙергә, кисерергә, айышына төшөнөргә ваҡыт кәрәк. Ваҡыт хәсрәтте лә, шатлыҡты ла, айышһыҙлыҡты ла урынына ҡуйыусы төп һәм алыштырғыһыҙ дауа ул. Ваҡыт аңды уята. Тимәк, мөхәббәттә йөрәк менән аҡылдың берҙәм булыуы зарур.

Кешенең төп инстинкты - бала тыуҙырыу. Ғашиҡтарҙың никахы шулай ҙа, ғашиҡтар тойғолар солғанышында нисек кенә бәхетле булмаһын, уларҙың тәҡәтһеҙ ярашыуыуының ихтыярынан былай, Раббы тарафынан ырыуҙың ғүмерен дауам итеү хаҡына эшләнә. Эйе, ғашиҡтар үҙҙәренең бер-береһен табышыу бәхетенә ихлас күңелдән ышана һәм ләззәт кисерә , әммә кешенең төпкө аңы шулай ҙа ғашиҡтарға тик уларҙың союзынан ғына тыуасаҡ балалар хаҡындағы маҡсатты ҡуя. Нәҡ ана шул инстинкт кешене мөхәббәт тигән серле лә, ғазаплы ла, илаһи ҙа тойғолар эсенә әйҙәй. Шул инстинкт һәм мөғжизәле мөхәббәт кисерештәре йәшәүҙе мәңгеләштерәсәк киләсәк быуынға ғүмер бирә. Юҡ, әлбиттә, тәүге осорҙағы ҡайнар хистәр улай уҡ мәңгелек түгел, йылдар ул хистәрҙе һүрелдерә биреп тә ҡуя, әммә теге аңлайышһыҙ бер-береңә тартылыуға килтергән тәҡәт ғәләмәтен икенсе тойғолар, икәүләшеп "ижад" иткән балаларға булған яратыу, наҙ, ҡурсаларға, тәрбиә бирергә тырышыу хистәре алыштыра, шул рәүешле, ир менән ҡатын бер-береһенән айырылғыһыҙ бер бөтөнгә, ғаилә тип аталған берҙәмлеккә тарый. Хистәр һыуынғас айырылышыусы ғаиләләр ҙә бар. Быныһы XX-XXI быуаттың әлеге лә баяғы рухиәткә ынтылыуҙан баш тартып, ләззәткә, матдилыҡҡа күсә барыуы кеүек мәғәнәһеҙ ғәҙәттәренең сәскә атыуы, үрсей барыуына бәйле, күрәһең. Бындай айырылышыуҙарҙың төп фажиғәһе - балаларҙың етемлеге.

Ғүмер буйы бер-береһен идеаллаштырған бәхетле никахтар күп булмай. Мөхәббәттән бәхетле булыусылар ҙа һирәк. Киреһенсә, дауылға оҡшаш хистәр өйөрмәһенә инеп башын юғалтҡан, яртыаҡыл хәленә ҡалып бөткән саҡтарынан ҡотола алғаны өсөн ҡыуанып бөтә алмаған кешеләрҙе осратҡаным бар.

Әммә үҙ ғүмерендә киләсәк быуындарҙа дауам итергә ынтылыу теләге үлемһеҙ. Күргәнебеҙ бар бит, ғашиҡтар бер-береһенең күҙенә шундай мөкиббәнлек менән текләүсән. Юҡтан түгел бындай табыныуға оҡшаш бирелгәнлек, улар бер-береһенең күҙенән үлемһеҙлек эҙләй. Нәҡ ошондай үлемһеҙлек, күрәһең, беҙҙең ерҙәге ғүмеребеҙҙең асылын һәм мәғәнәһен тәшкил итәлер ҙә. Мөхәббәт, тимәк, эске аңдың йәшәүгә булған ихтыяры. Шул ихтыяр көсө ир менән ҡатынды ҡауыштыра, балалар тыуҙырыу кеүек изге ғәмәлгә әйҙәй, балалар, билдәле инде, беҙҙең ҡаныбыҙҙы мираҫҡа ала, ҡан аша милли, генетик, тарихи хәтер ҙә йәшәүен дауам итә. Үлемһеҙлек идеяһы солғанышындағы кешеләрҙе танымау мөмкин түгел, улар үҙҙәре үк быны йәшерә алмай. Улар, йәшәүҙе мәңгеләштереүҙең серенә төшөнгән ике заговорсы кеүек, шул серҙе, йәшәүҙең төп мәғәнәһен тормошҡа ашырыу маҡсатына табан ашыға һәм ошо үтә лә тәрән миссияны мөхәббәт тип атай. Миңә ҡалһа, иҫ киткес шәп "ҡармаҡ" был. Иҫ киткес шәп! Хатта ки, Аллаһтың иң гениаль табышы һәм... хәйләһелер ҙә әле.

Кешене байтаҡ гонаһтарҙан, яман аҙымдарҙан ҡурсалауҙағы төп таяныстарҙың береһе булған мөхәббәт кисерештәренән бәндәләрҙең баш тарта алғаны юҡ әле. Өҫтөнлөктәр, формациялар, йәшәү шарттары үҙгәрә, ер өҫтө лә, халайыҡтар ҙа афәткә, ғазаптарға, юғалтыуҙарға тарый, әммә йәшәүгә ихтыяр һәм уны мәңгеләштереү идеяһы юғалмай. Әйтергә кәрәк, иҫ киткес тәрән һәм даими, шул уҡ ваҡытта үтә юғары динамикаға көйләнгән идея был. Беҙ уға күндәмлек, бирелгәнлек, инанғанлыҡ һәм үҙ теләгебеҙ менән буйһонабыҙ.

Ә минең шиғырҙарымдағы мөхәббәт темаһының өҫтөнлөгө лә тик мөхәббәт эҙләп кенә йәшәгәнем өсөн түгел, асылда, Аллаһтың аша шул Мәңгелекте һуғарыуҙағы камил һәм ҡабатланмаҫ ҡөҙрәтенә һоҡланыуҙан, был ҡөҙрәттең тәрәнлеге һәм юғарылығына мөкиббән ғашиҡлыҡтан ул.

### Ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егет

Кеше. Эйе, беҙ һәммәбеҙ ҙә әйләнә-тирәләге шарттар, милли мөхит, әкиәттәр һәм китаптар менән тәрбиәләнәбеҙ. Бындай тәрбиә, аңға һәм күңелгә һеңгән мәғлүмәт беҙҙе кеше итеп үҫтерә, холҡобоҙҙо, ышаныстарыбыҙҙы формалаштыра. Әкиәттәребеҙ, риүәйәт-легендалар, мифология, асылда, ҡурҡыу белмәҫ батырҙар, ҡыйыу йөрәкле геройҙар хаҡында, китаптарҙан да беҙ ана шундай айырым һәләтле шәхестәр хаҡында уҡыйбыҙ һәм ҡыҙҙар күңелендә кино геройҙарына, китаптыҡыларға оҡшаған йәр осратыу хаҡында хыял ярала. Әммә тормош бүтәнсәрәк ул. Геройҙар күп булмай. Рыцарҙар ҙа һирәк осрай. Шуға күрә, минеңсә, ҡыҙ баланы тормошҡа айыҡ күҙ менән ҡарарға өйрәтеү зарур. Күк атҡа атланған йәиһә ал елкәндәр таҡҡан карапҡа ултырған рыцарҙы көтөргә ярамай. Кешеләр ябай ул. Ир-ат та әллә ни ҙур ҡөҙрәткә эйә түгел. Ул ҡатын-ҡыҙҙан ни бары физик яҡтан көслөрәк булыуы менән генә айырыла. Психологик һәм мораль яҡтан беҙ бер-беребеҙҙән ҡалыш түгел. Ана шундай ысынбарлыҡты баһаларға, танырға өйрәнһәк, тормоштағы конфликттар, аңлашылмаусанлыҡ һәм дәғүәләр, ҡыйралған яҙмыш һәм ғаиләләр ҙә әҙерәк булыр ине.

Ҡыҙҙарға рыцарь эҙләмәҫкә кәрәклекте юҡҡа ғына әймәйем. Ғаилә ҡорғанда ир-атҡа өҫтөнлөк биргән шарттар солғанышында йәшәргә мәжбүр буласаҡһың. Бүтән юл әлегә юҡ.

Ә асылда, ир-егеткә донъя көтөү беҙгә, ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда ла ауырыраҡ. Беҙ улдарыбыҙҙы, аталары хыялыбыҙҙан алыҫ булыу сәбәпле, идеалдарыбыҙҙы тормошҡа ашырырлыҡ итеп тәрбиәләргә тырышабыҙ. "Һин малай ҙа инде, ебемә!" Ә ул малай беҙҙең ҡаныбыҙ һәм йәнебеҙҙән яралған. Ул беҙҙең ҡыҙыбыҙҙан тик физик көсө менән генә айырыла, рухи көстө Аллаһ һәммәбеҙ өсөн дә ғәҙел бүлә. Ә бит физик көс, бер уйлаһаң, ул тормошобоҙҙа ни тиклем кәрәкле һәм ҡөҙрәтле булмаһын, рухи көстән юғарыраҡ түгел. Шулай ҙа бөгөнгө цивилизацияның яҙмышы бит ир-ат таһыллығы һәм аҡылына, уның көсөнә бәйле. Үтә яуаплы миссия был.

Ир-егетте мин йәлләйем. Бигерәк тә мегаполистарҙың ҡатмарлы конструкцияларын күтәргән, цивилизацияның айырылғыһыҙ өлөшө булған коммуникациялар һәм инфраструктураны тәьмин иткән ҡара һәм ауыр эштәрҙе башҡарыусы ир-егеттәр эшмәкәрлеген күргәндә, эсем өҙөлә. Миңә кеше, уның тәбиғәте, мөхәббәте, мәңгелек алдындағы бурысы хаҡында фәлсәфә ҡорорлоҡ шарттарҙы кем тыуҙыра һуң? Крандан эҫе, һыуыҡ һыу аға, газ плитәһе яна, ғәфү итегеҙ, ашҡаҙаным эшкәрткән ҡалдыҡтарҙың мәшәҡәтһеҙ ағып китеүен кем тәьмин итә һуң? Мин философ-шағирмы? Йәиһә бесән әҙерләп үрсетелгән мал итенән, ир көсө менән ер ҡаҙып үҫтерелгән йәшелсәнән оҫта итеп ризыҡ рәтләгән ҡатынмы?

Ир-егетте мин йәлләйем. Ил өсөн ҡанын ҡойған фронтовиктар, илде күтәрәм тип төҙөлөштәрҙә, ил һағында көсөргәнеүселәр хаҡындағы киноларҙы, документаль кадрҙары күргәндә илайым. Ир-атҡа ҡояш аҫтындағы урын, карьера өсөн дә көрәшергә, тәбиғәттән һалынған амбицияларын тормошҡа ашырыу өсөн абруй яулап айҡашырға ла тура килә. Ир-аттарҙың күбеһе "булдыҡһыҙ" тигән мөһөрҙән ҡурҡа. Дөрөҫ, көсәнеп йәшәй-йәшәй кендеген дә ҡаната ул.

Ә унан да бигерәк ҡатын-ҡыҙҙы йәлләйем. Идеалдары тормошҡа ашмаҫ шарттарҙа йәшәргә мәжбүр, әммә Мөхәббәт тигән усаҡтар һүрелгәндән һуң да балаларын тәрбиәләүгә, иренә хеҙмәт итеүгә дусар, шуны бәхет тип танырға мәжбүр ҡатын-ҡыҙҙы әйтәм.

Эйе, ҡырағай тарпанды ҡулына эйәләштергәне бирле үҙенең көслө зат булыу хоҡуғын яулаған, ғаиләнең туҡлығы өсөн яуаплылыҡты үҙ теләге менән өҫтөнә алған ир-егеткә бөгөн үҙе өсөн үҙе килтереп сығарған ҡанундар эсендә йәшәү, үҙенең булдыҡлылығын иҫбатлау еңел түгелдер. Улар, үкенескә ҡаршы, Аллаһ тарафынан ҡуйылған әхлаҡи талаптар көсөргәнешен тартып бөтә алмауҙары сәбәпле, бөгөн мораль ҡыйралышҡа ла тарып ҡуя.

Ә ҡатын-ҡыҙ... Ҡатын-ҡыҙҙы мин ихлас күңелемдән хөрмәт итәм, сөнки уларҙың хәсиәте миңә аңлайышлы. Уға баш мейеһе эшмәкәрлеген егеп, Бар Ҡылыусыбыҙҙың төп маҡсатты - Мәңгелекте, Мөхәббәт, инанғанлыҡ, табыныу сигендәге бирелгәнлек, теләһә ниндәй шарттарҙа ла ана шул Бөйөк идеяны төпкө аң, йәнде һуғарыусы ҡан аша бойомға ашырырыу мәжбүрилеге яҙған. Асылда, мәжбүрилекте ҡатын-ҡыҙ яратмай. Тормош юлына баҫыр алдынан Армия сафында хеҙмәт иткән, аҙаҡ тотош ғүмерендә субординатив буйһоноуҙы тәбиғи тип иҫәпләргә өйрәтелгән ир-аттан айырмалы, ҡатын-ҡыҙҙың тәбиғәте баҫҡыслы буйһоноусанлыҡты яратмаһа ла, баштараҡ "һин, һин" тигән йәренең тораҡ "мин, мин" тигән талаптарына күнеүгә риза була. Риза булмаһа - ул алйот. Иренең ихтыярын яҙмышы тип һанамаған, үҙен уның идеалдары хаҡына ҡорбан итмәгән ҡатын йүләр һанала. Ә был ысынында ла шулай, сөнки бөгөнгө беҙ йәшәгән цивилизация ирҙәр ҡанундары, уларҙың психологияһы, аҡыл һәм физик көсөнә яраҡлаштырылған. Бөгөн ғаилә мөнәсәбәттәренең бүтән формаһы юҡ тиерлек. Әммә ҡатын-ҡыҙҙы ла бөгөн бик үк көсһөҙ зат тип атап булмай. Белем, таһыллыҡ, рухи яҡтан ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ярайһы ҙур үҙгәрештәр кисерә. Улар ҙа хәҙер мал табыуға, идара итеү һәләтенә эйә була бара. Нисек булыр, был ниндәйҙер өҫтөнлөктәр үҙгәрешенә килтерерме? Үҙгәрештәр конфликттар аша яуланырмы, әллә яҡтарҙы компромислы килешеүҙәргә килтерерме? Уныһы - киләсәк ҡулында. Әммә кешелек, минең тоҫмаллауымса, ғаилә институты, мөхәббәт емеше булған балаларҙы донъяға табыу кеүек изге миссияны үтәүҙән баш тартыуға уҡ барып етмәйәсәк. Һәр хәлдә, Юғары Аң бындай яман уйҙан аралау ысулы һәм юлдарын табышасаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кеше. Йыһан эсендәге иң хәсрәткә, һағышҡа, һыҙланыуҙарға, юғалтыуҙарға, бәхет, шатлыҡҡа дусар, Мөхәббәт тигән серле мөғжизәне татыу бәхетенә эйә, ижади асыштар яһарға, ҡыйралыштарҙы кисереүгә һәләтле, ғилми телдә "һомо сапиенс" тип аталған кеше, ғөмүмән, Кешелек, мин һеҙгә рәхмәтлемен. Тотош серҙәрҙе, һеҙ уйлап тапҡан тәғлимәттәрҙе үҙләштерерлек һәләтем булмаһа ла, һеҙҙең табыштар менән туҡланырға, бер аҙ булһа ла үҙемсә һығымталарға килә алырлыҡ мәғлүмәт тупларға өйрәткәнегеҙ, мөмкинлектәр асҡаныгыҙ өсөн рәхмәтлемен!**

**Беҙ эволюцияға бирелеүсән йән эйәләре. Эволюция, күрәһең, үҙе лә сикһеҙ түгел. Байтаҡ фәнни табыштар, тормошобоҙҙо еңеләйтеүсе ғилми һәм техник асыштар менән файҙаланып ғүмер итәбеҙ беҙ бөгөн. Ә артабан? Минеңсә, беҙ әлегә бер аҙ депрессияға бирелеберәк, киләсәкте тоҫмаллау юлдарын эҙләгән осорҙа йәшәйбеҙ. Әммә кешелектең потенциалы тамамланмаған. Ҡайҙа табан йүнәлеш алырбыҙ? Ниндәй илаһи идеялар мауыҡтырыр, ниндәй идеалдар маяғыбыҙ булыр? Билдәһеҙ.**

**Билдәле булһа, күңелһеҙ булыр, ижади ойоштороуға талап булмаһа, йәшәү үҙе лә мәғәнәһеҙлеккә дусар булыр ине. Ә бит йәшәүҙең төп мәғәнәһе - ҡыҙыҡһыныулы ижади ғүмер, танып-белеүгә ынтылыш ул. Һәм кешеләр, үҙ-ара ҡатмарлы, хатта ки, аңлап бөтөүе бик үк еңел булмаған мөнәсәбәттәр арһындағы иң ҙур һәм илаһи тойғо Мөхәббәттең йәшәүебеҙҙең иң төп таянысы булыуына һоҡланырға ғына ҡала.**

**Бер ҡатлыраҡ микән инде был уйланыуҙарым... Ә, бәлки, һеҙ бүтәнсәрәк уйлайһығыҙҙыр?**

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

**(Аҙағы. Башы 47-се һанда).**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# ЕВРОПАНЫ ҺОҠЛАНДЫРҘЫҠ...

## рухыбыҙ менән

(Башы 1-се биттә).

### Ата-бабалар эҙенән

Император Наполеон дәүеренең иң ҡан ҡойғос баталияһы 1813 йылдың 16-19 октябрендә Германия (Саксония) иленең Лейпциг ҡалаһы янында була. Тарихта "Халыҡтар һуғышы" исеме алған алышта алты дәүләт ғәскәре һуғыша. Быйыл 19-20 октябрҙә Лейпциг янында үткән "Халыҡтар һуғышы" ваҡиғаһының 200 йыллыҡ юбилейына арналған Халыҡ-ара реконструкция фестивалендә 26 илдән килгән 6 мең патриот-реконструктор ҡатнашты. Ошо патриоттар араһында Башҡортостандан "1-се башҡорт атлы полкы. Любизар" (Төньяҡ амурҙары) хәрби-тарихы клубынан 8 яугир, "Өфө пехота полкы" клубынан 7 һалдаттың да булыуы ата-бабаларыбыҙ рухын хөрмәт итеп һәм һаҡлап, ике быуат элек булған ваҡиғаларҙы тергеҙеп яланға сығыуы ҡыуаныслы. Әйткәндәй, беҙҙең Европа походы маршруты ла, бынан 200 йыл элек олатайҙарыбыҙ ат өҫтөндә үткән яу юлын өлөшләтә ҡабатланы: Мәскәү-Смоленск-Белоруссия (Минск)-Польша (Брест, Кобрин)-Чехия (Вроцлав, Прага, Краков)-Германия (Дрезден, Нюрнберг, Лейпциг). Европаның Висла, Одер, Эльба кеүек йылғаларын аша сыҡҡан саҡта ирекһеҙҙән, атабабаларыбыҙ тарихта нисә тапҡыр ошо йылғаларҙа ат эсергән икән, тигән ғорур уй тыуҙы.

Лейпциг лагерында һәр ғәскәр айырым лагерь булып тора: пехота, кавалерия, артиллерия һ.б. Лагерь тормошо XIX быуат заманын ҡабатлай: ағас һауыт-һабалар, палатка-бивуак, кейеммундир, ҡоралдар. Реконструкторҙарҙың һәр береһе "аяҡлы энциклопедия", "беҙ шулай, беҙ былай булғанбыҙ" тип, халҡындың тарихында булмағанды күкрәк ҡағып шапырынып һөйләү бында урынһыҙ, ул тик көлкө генә тыуҙырасаҡ. Шуға күрә реконструктор өсөн иң изге бурыс - үҙ халҡындың тарихын өйрәнеү, белеү һәм таратыу.

### Атҡа менеп алдыҡ та...

19 октябрь көнө сараны ойоштороусылар кавалерияға ат бүлделәр. Беҙгә башҡорт тоҡомло йылҡыларға тартым булған биш баш ат бирҙеләр. Аттарҙы алыр алдынан ғына ОРТ каналының хәбәрсеһе Иван Благой башҡорт яугирҙәренән интервью алды, Төньяҡ амурҙары телеведение алдында ла һынатманы, уҡ атып күрһәтте (Учалынан Мәжит Ибраһимов), мин ҡурай тарттым, Рафаэль Амантай (Башҡортостандың халыҡ артисы) бейеп күрһәтте. Аттарҙы эйәрләп менеп алғас, башҡорт егеттәрендә быуаттар буйына ойоған ата-бабаларыбыҙҙың гендары уянды, күрәһең, теҙгендәр ҡымтылды, күкрәктәр кирелеп, һындар турайҙы, күҙҙәрҙән осҡондар сәселде.

Репетиция сценарийға ярашлы үткәрелде. Беҙгә командир итеп Австрия ғәскәре офицеры тәғәйенләнде, был хәл тағы ла тарихты реконструкцияланы, 200 йыл элек тә бит ата-бабаларыбыҙға сағыу мундирлы гусар, улан, кирасир, енел кавалерия яугирҙәрен дуҫ (союздаш) йә дошманға айырыу ауыр булғанға күрә, 50 башҡорт һыбайлыһына бер альянс (союздаш) офицерын тәғәйенләгәндәр.

20 октябрҙә "Халыҡтар һуғышы" ваҡиғаһының реконструкцияһы башланды. Меңәрләгән пушка, биш мең мылтыҡ тауышынан дары болото ҡаплаған ер һелкенә. Рәсәй кавалерияһы өсөн тәғәйенләнгән 130 баш аттың Польша сиген үтә алмау сәбәпле, рус кавалерияһы ролен башҡарыу Дон казактарына (Мәскәү клубы), Төньяҡ амырҙарына (Өфө) һәм гусарҙар (Австрия клубы) реконструкторҙары иненә төштө. Шуға күрә башҡорт һыбайлыларын алыштың төрлө йүнәлештәрендә: маңлай, фланг, тыл атакаларында, разведка, засадала, Александр һыбайлы-һағында ла күрергә мөмкин ине. Ат тояғы аҫтынан осҡан ҡәҫ-тупраҡ, манма тиргә төшкән аттар, ҡолаҡ тондорғос канонада, ҡылыс алыштары, пехота һөжүме, уҡ сойорғотоу - бөтәһе лә реаль ваҡиғаларға ҡайтара, йөрәктәрҙә ғорурлыҡ уятып, ысын образ тыуҙыра. Биш сәғәт барған "алыш" тамамланғас, Александр I образын башҡарыусы Бөтә Рәсәй реконструкторҙары ассоциацияһы рәйесе Александр Вольковичтың саф алдында башҡорт яугирҙәренә Бөтә Рәсәй исеменән рәхмәт белдереүе башҡорт реконструкторҙары эшенә иң ҙур баһа булды. Лейпциг ҡалаһының таш урамдары буйлап ҡурай уйнап еңеүсе ҡиәфәтендә үтеү, "Халыҡтар һығышы" ҡорбандары иҫтәлегенә ҡуйылған һәйкәл янында тын ҡалыу, йыназа уҡыу, һәйкәлгә изге Баймаҡ тупрағын һалыу, ата-бабаларыбыҙ рухын һаҡлаусы, өйрәнеүсе һәм дауам итеүсе Башҡортостан патриоттарының маҡсатлы башҡарған эше.

### Шварц уғы

1814 йылдың 14 апрелендә, Наполеонды еңеп ҡайтып килеүсе башҡорт полктары, Тюрингияның Веймар ҡалаһынан 100 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Шварц ауылы янында ялға туҡтай. Лагерға килгән принц Карл Гюнтер башҡорт яугирҙәренең XIX быуат өсөн хас булмаған уҡ-һаҙаҡтарын күреп, был ҡоралдың яуҙағы һөҙөмтәлелегенә шикләнеү белдерә. Принцтың шиген таратыу өсөн иң мәргән дүрт башҡорт уҡ атып күрһәтергә була. "Ҡайҙа атырға?" тигән һорау тыуа. Урындағы священник ауыл кирхаһының көмбәҙенә төртөп күрһәтә (Кирха - лютеран сиркәүе. **Авт.**) Священниктың фатихаһын алған башҡорт уҡсыһы көмбәҙгә ҡарап уҡ ата. Уҡ көмбәҙҙең 2 миллиметр тимер ҡалайын тишеп ҡаҙала. Мин башҡорт яугире уҡ атҡан өйҙөң ихата ишеге янынан кирхаға тиклем араны аҙымлап үлсәп ҡараным. Яҡынса 93 метр, кирханың көмбәҙе бейеклеге 40 метр самаһы, диаметры 35 сантиметр. Күҙ алдына килтерегеҙ: ошо аралыҡты, елдең иҫеү көсөндә бөләкәй генә көмбәҙгә тейҙереү һәм көмбәҙ тимерен тишә алыу... Һай-һай! Афарин, башҡорт! Шаҡ ҡатҡан Шварц халҡы башҡорт уғын ауылдың күркәм бер әйбере тип ҡабул иткән. Күпмелер ваҡыт үткәс, ағас уҡ сереп төшкәс, тимер уҡ беркетәләр һәм тимер капсулаға хат яҙып һалалар.

2012 йылда кирханың ҡыйығын ремонтлау эштәре башланып китә һәм тимер капсуланы табып алалар. Лейпциг ҡалаһында йәшәгән яҡташыбыҙ Ирек Байышев һәм Вильфрид Хайнце әфәнде Шварц ҡалаһы бургомистрына көмбәҙгә алтынланған уҡ һәм таҡтаташ ҡуйырға тәҡдим итә һәм үҙ аҡсалары менән финанслайҙар. Афарин, Ирек уҙаман! Сара "Халыҡтар һуғышы" юбилей реконструкцияһы осорона планлаштырыла.

18 октябрҙә һигеҙ "Төньяҡ амуры", һигеҙ Дон казағы Шварц ҡалаһына барҙыҡ. Шварц ҡалаһы халҡы өсөн был көн ысын мәғәнәһендә иҫтәлекле ваҡиға булғандыр. Сөнки ҡала урамында уҡ-һаҙаҡлы яугирҙәрҙең, казактарҙың йөрөүе көн дә була торған хәл түгел! Машинабыҙҙы ҡуйған урында әсәһе ҡултыҡлап тотҡан 10 йәштәр самаһындағы малай иғтибарыбыҙҙы йәлеп итте. Танышабыҙ, исеме - Маркс, аяғын ҡаймыҡтырған икән. Маркстың беҙҙе шул тиклем күргәһе килгән, шуға күрә урамға сыҡҡан, һөйләшә торғас, әсәһе беҙҙе өйҙәренә ҡунаҡҡа саҡырҙы. Малай уҡ атыу менән шөғөлләнә, Санта Клаустан йәйә һорап алған, тик уҡтары юҡ, хәҙер башҡорт уҡтары был ҡунаҡсыл өйҙә лә урын алды.

Сара ҡала оркестрының Рәсәй гимнын уйнау менән башланды. Мәктәп балалары сығыштары бирәүҙе лә битараф ҡалдырманы, ә оркестр башҡорт көйҙәрен уйнап ебәргәс, егеттәрҙең күҙҙәренә йәш эркелде. Беҙ ҙә, үҙ сиратыбыҙҙа, бейеүебеҙ, ҡурайыбыҙ менән сығыш яһаныҡ. Ҡала бургомистры ҡала тураһында мәғлүмәт бирҙе, ошондай сараларҙың киләһе быуындар өсөн әһәмиәтле булыуын билдәләне. Кирха священнигы Трум әфәнде олатаһының ағас уҡты тимер уҡ менән алмаштырыуын һөйләне, табылған капсуланы асыу өсөн махсус экспертиза кәрәклеген әйтеп үтте.

Алтынға мансылған көмбәҙгә ҡаҙалған уҡты килтерҙеләр, көмбәҙгә һалынасаҡ еҙ капсула (гильза) эсенә "Башҡорт халҡының хәрби даны" исемле клубтың миҙалы, хәрби-тарихи клуб тураһында буклет, немец телендә киләсәк быуындарға өндәмә һалынды һәм иретеп йәбештереп ябылды. Ҡеүәтле кран ярҙамында көмбәҙҙе кирха манараһына урынлаштырғас, таҡтаташ асыу тантанаһы үтте. Таҡтаташтың авторы - клуб ағзаһы, рәссам Азат Ҡужин. Урындағы халыҡ менән аралашыу, сығыштарҙы тәржемә итеүҙе Ирек Байышев һәм Лейпциг телевидениеһы хеҙмәткәре Нәсүр Йөрәшбаев (Пермь крайының Барҙым районы башҡорто) башҡарҙы. Ярты ай дауамында барған Европа походы һиҙелмәй үтте лә китте, автобуста барған һигеҙ тәүлек, реконструкция, Шварц ҡалаһы хәҙер төш кенә кеүек. Әгәр ҙә миңә башҡорт рухлы бағыусылар ярҙам итмәһә, поход ысынлап та төш кенә булыр ине. Рухи һәм матди ярҙам иткәндәре өсөн район хакимиәте башлығы И. Ситдиков, Р. Иҫәнбаев, Г. Сирғәлина, Х. Әминев, эшҡыуарҙар Р.Ирназаров, И. Йомағолов, Б.Ҡотлоғәләмовҡа ҙур рәхмәтемде белдерәм, һаулыҡ, ғаилә именлеге, эштәрендә уңыштар теләйем.

Европа походы осоронда Мифтахетдин Аҡмулланың ни өсөн "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!" тип әсенеп яҙыуын төшөндөм. Баҡтиһәң, Аҡмулла үҙ илендең генә хәрефен танып, уҡый-яҙа белеүҙе түгел, ә сит телдәрҙе белеү кәрәклеген дә әйткән икән.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА**
**әҙерләне.**



*✓ Ҡараһаҡ, Аҡбейек тауҙары өҫтөндә тотош ҡала хасил булған. 5-әр, 9-ар ҡатлы йорттар теҙелгән, урамдар… Бөтөнләй телһеҙ ҡалдым. Унан саҡ ҡына ситкәрәк китеп, баяғы офоҡ яғына ҡарап тора башланым.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЭШЛӘМӘГӘН ИР-ЕГЕТ...

## тиҙерәк ҡартая

■ Биологтар раҫлауынса, ике йыл һәм унан күберәк ваҡыт эшләмәгән ир-егеттәр үҙ тиҫтерҙәренә ҡарағанда иртәрәк ҡартая. Был турала PloS One журналы белдерә. Быны ДНК молекулаһындағы теломерҙың - хромосоманың осондағы участканың ҡыҫҡарыуы дәлилләй, бер нисә йыл эшләмәүсе ир-егеттәрҙә ул күпкә ҡыҫҡағыраҡ. Ҡыҫҡарған теломер ҡартлыҡтың етеүе тураһында белдерә һәм организмдың бәлтерәүенең сәбәбе булып тора. Лондондың Империя колледжы ғалимы Джессика Бакстон тикшеренеү барышында 1966 йылда тыуған ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең 5,5 мең ДНК өлгөһөн тикшергән. Өлгөләр 1993 йылдан башлап 6 йыл айырма менән алынған. Һөҙөмтәлә, күҙәнәк бүленеү өсөн кәрәкле теломерҙар ир-егеттәрҙән алынған өлгөләрҙә ҡыҫкағыраҡ булып сыҡҡан. Был кешеләрҙең биографияһы менән танышҡандан һуң, уларҙың ғүмерҙәренең 2-3 йылын эшһеҙ үткәреүҙәре асыҡланған. "Һуңғы йылдарҙа ғалимдар оҙайлы эшһеҙлек һәм насар сәләмәтлек араһында бәйләнеште табырға тырыша ине. Беҙ быны күҙәнәк кимәлендә раҫланыҡ", - ти Бакстон. Иң ҡыҙығы, был яңылыҡ ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағылмай. Ғалимдар хәҙер бының сәбәптәрен асыҡларға тырыша.

■ Йоҡо - энергияны һаҡлау, ваҡытты һәм көстө дөрөҫ ҡулланыу өсөн кәрәк, тип белдерә Лос-Анджелестың Калифорния университеты ғалимы Джером Сигель. Баҡтиһәң, йоҡлаған саҡта организмдың иң күп энергия тотоноусы ағзалары һүнеп тора икән. Мәҫәлән, мейе дөйөм кәүҙә массаһының 2 процентын ғына алып тора, әммә 20 процент энергия тотона. Шуға ла организмға көнөнә 6 тапҡыр туҡлыҡлы итеп ашағансы, уны 8-10 сәғәткә һүндереп тороу күпкә файҙалыраҡ.

■ Америка ғалимдары бер ҡасан да көсө бөтмәй торған батарейка уйлап тапҡан. Был батарея ядролы һәм энергияны радиоактив изотоптар тарҡалыуы һөҙөмтәһендә ала, шуға ла уның кеше өсөн хәүефһеҙ булыуын аныҡ ҡына әйтеп булмай. Әммә уны уйлап табыусы Миссури университеты ғалимдары әйтеүенсә, бында хәүефләнергә урын юҡ, сөнки ядролы энергия сығанағы көнкүрештә күптән ҡулланыла, мәҫәлән, яһалма йөрәк, космик спутниктар, пилотһыҙ оса торған аппараттар тап ошондай батареялар ярҙамында эшләй. Тик хәҙер ғалимдар был батареяны биш һумлыҡ тимер аҡса ҙурлығында ғына итеп яһауға өлгәшкән, уны кәрәҙле телефондарға, ноутбуктарға, фотоаппараттарға ҡуясаҡтар. Иң мөһиме - уны йөҙ йылға яҡын ҡулланып буласаҡ. Әгәр ҙә бөгөн бер цифрлы гаджеттың 3-5 йыл ғына эшләүен иҫәпкә алғанда, бындай батареяларҙың кәрәклеге генә шик тыуҙыра.

■ Айова университеты ғалимдары ир-егеттәргә ҙур танау кәрәклеген ғилми яҡтан дәлилләгән. Уларҙың фекеренсә, ир-аттың танауының ҙурлығы кислород ихтыяжы менән бәйле, билдәле булыуынса, ир-егеттәр гүзәл затҡа ҡарағанда һауаны күпкә күберәк һулай. Был ирҙәрҙең мускул массаһы менән бәйле, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына ҡарағанда массаһы буйынса ул ҙурыраҡ булғас, энергияны һәм кислородты ла күберәк талап итә.

ҮӘТ, МӨҒЖИЗӘ!

**Кеше ышанмаҫтай хәбәрҙе ысын булһа ла һөйләмә, тиһәләр ҙә, ҡәләмгә тотонорға булдым. Сөнки был хәл эскә генә һыйҙырырлыҡ түгел. 24 ноябрь, ял көндө, ҡапыл ғына тыуған ауылым Байғаҙыға барырға булып киттем. Апайымдар һуғым һуйырға тейеш ине. Гәзиткә шул турала материал да әҙерләрмен, фотоға ла төшөрөп алырмын, тип тә уйланым. Ҡапыл, әйтерһең, нимәлер ҡабаландыра башлағандай булды мине. Хатта мейесемдәге янып ятҡан торонбашты ла тышҡа сығарып бәреп, мейесте ҡыҙыу килеш ябып, эләгә-йығыла тигәндәй йәһәт кенә йыйынып, сығып киттем. Редакцияға барып, бикле бинаны ҡарауылсынан астырып, ҙур фотоаппаратты алдым да, елдерҙем ауылым яғына.**

# МОНАРМЫ? ПАРАЛЛЕЛЬ ДОНЪЯМЫ?

## Нимә булды был?

Көн салт аяҙ. Күктә болоттоң әҫәре лә юҡ. Күңелле уйҙар уйлай-уйлай елдерәм генә машинамда. Инде ауылға етергә лә күп ҡалманы. Ҡайтҡан һайын тиерлек туҡтап, телефондан һөйләшеп (сөнки тап шул ерҙә кеҫә телефоны һәйбәт тота), тирә-яҡты байҡап китә торған урында өс ир заты күҙгә ташланды. Юлдың уң яғында - автомобиль. Был өс ир минең юлыма сығып тиерлек ҡул болғай башланы. Күңелде бер аҙ шөбһә баҫты. Машиналары боҙолоп, мине ир кешелер тип уйлап, ҡул болғайҙарҙыр инде, тип ҡурҡыңҡырап, туҡтамай үтеп китергә лә уйлағайным, араларында Иҫке Собханғолдан Дәриғәт Ямаловты танып ҡалдым. Ҡустымдың дуҫы, үҙем дә ихтирам иткән кеше булғас, туҡтаным.

"Апай, ана, ҡарағыҙ әле", тиҙәр тегеләр бер тауыштан ҡайҙалыр төртөп күрһәтеп. "Нимәне?" тип аптырап, машинамдан төштөм. "Фотоаппаратығыҙ юҡмы?" тигәстәр, фотоаппаратты ла алдым. Егеттәр ымлаған яҡҡа ҡараһам... Бәй, офоҡта бер ҡара шәүлә күренә. Аңғансы, ул икенсе бер ҡиәфәткә инде. Фотоаппаратымды тоҫҡап, төшөрөргә маташам, төймәһе баҫылмай ҙа ҡуя. Ул арала теге шәүлә юҡҡа сыҡты. Уның ҡарауы, шул тирәлә бер аҡлан барлыҡҡа килде. Күп тә тормай, йәнә юғалды.

Бына беҙҙең эргәгә тағы машина килеп туҡтаны. Әбделмәмбәттән Йыһанур Шәмиғолов икән. Ул да аптырауға ҡалды. Тағы юлаусылар килеп туҡтаны. Күмәк булып киттек. Ул арала Дәриғәт, килегеҙ әле бында, тип, үҙе баҫып торған ергә саҡырҙы. Ҡараһаҡ, Башҡортостан дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы биләмәһе яғында, Аҡбейек тауҙары өҫтөндә, тотош ҡала хасил булған. 5-әр, 9-ар ҡатлы йорттар теҙелгән, урамдар... Бөтөнләй телһеҙ ҡалдым. Унан саҡ ҡына ситкәрәк китеп, баяғы офоҡ яғына ҡарап тора башланым. Минең күҙ алдында офоҡ бер урындан уртаға ярыла башламаһынмы... Арыуыҡ ҙур асыҡлыҡ хасил булды. Егеттәргә күрһәтә һалдым. "Беҙҙең күҙ алдында ла әллә нисә тапҡыр яландар хасил булып, кире "ағас үҫте" инде", - тиҙәр.

Ҡапыл ҡарашым беҙгә яҡыныраҡ урманға төштө. Ағастар араһынан өс өй күренгән һымаҡ. Яңы ғына һалынған, тиерһең, һап-һары ағастан. Аптырап, тағы ла егеттәргә күрһәтәм. Улар ҙа аптыраны, яңы ғына юҡ ине ул тирәлә бер нәмә лә, тиҙәр.

Ҡыҫҡаһы, аптырауҙың сигенә сығып, аяҡ өшөй башлағас, һуғым мәсьәләһе иҫкә төшөп, ауыл яғына ҡуҙғалдым. Ҡапыл һул яҡтан күҙемә тауҙар салынды. Шул тиклем бейектәр һәм баштары еңелсә генә бер яҡҡа ауышҡан һымаҡ тойолдо. Тик... ҡыҙғаныс, туҡтарға йыбандым.

Ауылға ҡайтып етеп, күргәндәремде һөйләгәс, барыһы ла аптырауға ҡалды. Ышанып та етмәнеләр шикелле.

Өс сәғәт тирәһе ауылда булып, ҡайтырға сыҡтым. Баяғы ерҙән үтергә кәрәк бит инде. Әҙерәк шөрләтһә лә, туҡтаным. Бәй, тауҙар ҙа, офоҡ та элек нисек булған, шулай. Әллә төш булдымы баяғы хәл, тип аптырап, артабан ҡуҙғалдым.

**Икенсе көндө Дәриғәтте редакцияға саҡырмай булдыра алманым. Бына нимәләр һөйләне ул:** Темәс яғына китеп бара инек. Ҡырын яҡтан күҙгә ниҙер сағылғандай булды. Ләкин алда ҡырҡа боролош, етмәһә, юл тайғаҡ. Шуға асыҡ ерҙә туҡтарға булдым. Машинанан төшөп, ҡарай башланыҡ. Офоҡта ниндәйҙер һындар барлыҡҡа килә, үҙгәрә һымаҡ. Ентекләберәк күҙәтә башланыҡ. Офоҡ буйлап... эшелонлы поезд китеп бара. Уны ҡараш менән оҙатып ебәрҙек. Күҙ алдында ҙур асыҡ ялан барлыҡҡа килде. Ялан уртаһында ике кеше лә торған һымаҡ. Поезд алыҫ киттеме икән, тип, шул яҡҡа ҡараған арала теге яланды ағас та баҫып киткән. Ә поезд барып туҡтап, кешеләрен төшөрҙө. Шунан АН-2 һымаҡ ике ҡанатлы самолет килеп төштө. Аэродромындағы һыҙыҡтарына тиклем күренде. Унан да кешеләр төштө. Был яҡтараҡ урман араһынан 5 ҡатлы йорт хасил булды, теге яҡтараҡ 9 ҡатлыһы...Мәсет тә күҙгә салынғандай булды. Аптырауҙан хайран булып, телефонымa йәбештем. Дуҫым Иршат Сәйетбатталовҡа шылтыратып, һеҙгә, журналист кешегә хәбәр иттереү ине уйым. Ләкин Иршат Байғаҙыла булған икән, телефоны яуап бирмәне. Телефондан шылтыратҡан икенсе кешем - уҡытыусым Мөхәммәт Зарипович Шәрипов булды. Ул Ишембайҙа йәшәй, 10 йыл буйы мәктәптә директорым булғайны. Шунан Иҫке Собханғолдан Фәриҙә










Айытбаеваға, БСТ-нан Шамил Кучуковҡа шылтыраттым.

Ә теге ҡурсаулыҡ биләмәһе яғында, үҙегеҙ күрҙегеҙ, тотош ҡала барлыҡҡа килде. Аҙаҡҡараҡ, һеҙ киткәс, ул бөтөнләй һәйбәт күренә башланы. Өйҙәрҙең тәҙрәләренә тиклем күрҙек. Урам да асыҡ күренде. Тик светофорҙар юҡ ине. Ул тирәләге тауҙар ныҡ аптыратты. Берсә баштары йайлап дүрткелгә әйләнә, берсә Карпат тауҙарына оҡшап китәләр. Тора торғас, икеүһе ҙурайып, ҡапҡа хасил итте...

**Фәриҙә Айытбаева һөйләй:** Ял көнө. Бер ваҡыт кеҫә телефонына Дәриғәт шылтырата. Бөрйән кейәүе ул. Сығышы менән Ишембай Ҡолғонаһы егете. "Фәриҙә апай, - ти. - Байғаҙы юлында бер ҡыҙыҡ күренешкә тап булдым. Юлдың һулаҡай яғында, тауҙар теҙмәһендә ҡатлы йорттарҙан торған бер ҡала күренә. Телефоныма төшөрөп ҡарайым, төшмәй ҙә ҡуя. Таңһылыу апайға шылтыратып ҡарағыҙ әле, фотоаппараты менән килеп төшөрөп китә алмаҫмы икән?"

Таңһылыуға шылтырата башланым, бер кем алмай. Дәриғәт: "Улайһа, Тимер яҡтарындағы тауҙар булырға тейеш, унда күрмәйҙәрме икән, берәйһенә шылтыратып ҡарағыҙ әле", тигәс, тарих уҡытыусыһы Райман Баймырҙинға шылтыраттым. Тик йәнә алыусы булманы. Шунан Йосоп ағай менән Флүрә апай Вәлиуллиндар иҫемә төшөп, уларҙы саҡырҙым. Улар килеп тә еттеләр. Мөғжизәнән буш ҡалмайыҡ, өлгөрөп ҡалайыҡ, тип елдерәбеҙ генә. Ана, Дәриғәт беҙҙе көтөп тора. Дәррәү генә машинанан төшәбеҙ. Һәр ҡайһыбыҙҙың йөҙөндә "Ҡайҙа?" тигән һорау. Дәриғәт беҙҙе юл ситенә алып килеп, һул яҡтағы тауҙар теҙмәһенә төртөп күрһәтә. Беҙ ул күрһәткән яҡҡа төбәләбеҙ. Остары менән күккә төбәлгән тауҙарҙан ары ысынлап та ҙур ҡала ҡалҡып тора. Тау итәгендә урынлашҡанғамы, бер нисә ҡатлы өйҙәр бейек, күп ҡатлы булып күренә. Өйҙәр ҡыйыҡлы, бер нисә урамы ла бар. Хатта өйҙәрҙең тәҙрә уйымдарына хәтлем күренеп тора. Ҡыҙыҡ...

- Күрҙегеҙме, алға ҡарай шыла бара, - ти Дәриғәт. - Бая был яҡтараҡ булғас, асыҡ ерҙә яҡшы күренә ине. Әле ағастар артында ҡалды. Ҡаланың алдында мәсет һымағыраҡ бер нәмә лә күренә ине. Сәғәт ярымдай торам инде үҙәтеп. Төньяҡта эшләп йөрөгәндә лә ошондайыраҡ күренешкә осрағайным.

Дәриғәт Темәс яғына китте. Беҙ йәйәүләп Темәс яғына киткән машина артынан боролошҡа тиклем барып туҡтап ҡалдыҡ. Теге ҡала әллә ҡайҙарға тиклем һуҙылған. Артабан да ҡарап барыр инек, ул яҡты ағастар ҡаплай, бер нәмә лә күренмәй.

Көн ап-аяҙ. Беҙҙә һыуыҡ һымаҡ ине, бында йылы, һил. Шундай рәхәт! Ҡайтҡы ла килмәй. Был ерҙең үҙенә күрә бер хикмәте бар шикелле. Әллә бәрәкәт төшкән ер был? Ҡайтыр юлға йыйынабыҙ. Һәр кемебеҙҙең уйында әле генә күргән мөғжизәле ҡала. Ниндәй ҡала ул? Ҡайҙан килеп сыҡҡан: үткәндәнме, әллә киләсәктәнме? Үҙе хас та үле, ул ҡалала тормош юҡ һымаҡ. Әллә параллель донъяға илткән ҡапҡа шундамы? Һорауҙар күп, әммә береһенә лә яуап юҡ. Машина эргәһенә барып етеп, ҡала күренгән яҡҡа ҡарайбыҙ. Әстәғәфирулла тәүбә! Ҡала юҡҡа сыҡҡан! Аҡ ҡала урынында осло башлы тауҙар... Ярай әле, килеп өлгөргәнбеҙ.

Машинаға ултырып ҡайтыр яҡҡа ыңғайлайбыҙ. Күңелдәр күтәренке. Баяғы хикмәтле күренеш тураһында фекер алышабыҙ. Дәриғәткә рәхмәт әйтәбеҙ. "Һә" тигәнсә ҡайтып еттек. Баштарыбыҙ тулы һорау булһа ла, күңелдәребеҙ тулы моң ине...

* * *

Был нимә булды һуң? Әле булһа ошо һорауға яуап таба алмайым. Ниндәй көс мине тиҙ генә йыйынып, Байғаҙыға сығып китергә мәжбүр итте? Дәриғәттең мине эҙләп шылтыратыуын минең аң "тотоп алдымы"? Икенсе, параллель донъя асылдымы беҙҙең алда?

Хәйер, параллель донъя барлығын инҡар итмәйҙәр. Мәҫәлән, ендәр күсеүе хаҡында ла йыш ҡына ишетергә тура килә. Яныраҡ ҡына был турала Килдеғол ауылынан Мөнир Фәйзуллин да яҙғайны. Унда ул Килдеғол ауылы тирәһендәге Бирелейорт тигән ерҙә бирелер күсеүен бесәнселәр ишетеүе хаҡында бәйән иткәйне.

Бынан тыш, матбуғатта беҙҙең көндәрҙә перронда поезд көтөп торған кешеләр алдына боронғо паровоз килеп туҡтап, унан боронғоса кейенгән кешеләр төшә башлауы хаҡында ла хәбәр булғайны. Иң ҡыҙығы шул - перрондағы кешеләр күрһә лә, тегеләр уларҙы күрмәгән һымаҡ үтеп киткәндәр.

Тауҙар үҙҙәре лә сер сығанағы, изге урындар. Әйтәйек, Башҡортостан дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығына килгән бер фоторәссам, мин ҡайҙа ғына йөрөмәнем, ер шарының ниндәй генә тауҙарында булманым, бындай көслө энергиялы тауҙарҙы күргәнем булманы, тигән, тип һөйләгәйнеләр.

...Иң ҡыҙығы икенсе көнөнә булды. Редакцияға эшкә барғас, ҡыҙҙарға тегеге хәлде бәйән иттем дә фотоларҙы күрһәттем. Бына, тейем, китеп барғандағы фотоларҙа ҡала күренә, ҡайтҡанда - һиллек, бер нәмә лә юҡ.

Төшкө ашҡа ҡайтып килгәс, теге фотоларҙы фотошопҡа сығарып, ҙурайтып ҡарай башланым һәм аһ иттем. Ҡайтып барғанда төшөргән бер фотола ҡала фрагменттары хасил булмаһынмы. Ныҡ алыҫтан төшөрөлгәс, әлбиттә, фотошопта яҡынайтҡанда сифаты юғала. Шулай ҙа боронғо биналар асыҡ төҫмөрләнә. Хатта уң яҡта мәсет һымағыраҡ бер бина ла күренгәндәй. Тауҙарға һыйынып ултырған ҡала. Ә ауылға китеп барғанда хасил булған ҡала тауҙар өҫтөндә ине. Тимәк, ҡала күсә бирген. Гүйә, күктә аҫылынып торған һымаҡ. Болот, тиер инең, күктә болоттоң әҫәре лә юҡ ине.

Нимә булды был: миражмы, параллель донъямы? Һорауҙар бихисап. Яуап юҡ. Әлегә... Хәйер, бәлки, ошо үҙе беҙҙең бәгзе бер һорауҙарға яуаптыр. Тик әлегә был ишараларҙы аңламайбыҙҙыр ғыналыр...

... Теге фото тынғы бирмәй - яҭһам да, торһам да уйҙан сыҡмай. Кире юлға сығып, теге урынды яңынан фотоға төшөрөп ҡарағы килде. 26 ноябрь көндө тағы киттек. Төшөрҙөм. Ҡайта һалып, фотошопта ҡараныҡ - ҡәҙимге тау итәге, ағастар, теге ҡаланың эҙе лә юҡ...

**Быныһы интернеттан алынған мәғлүмәттәр:** "Матбуғатта Американың планета-ара космик станцияһынан космик бәйләнеш каналдары аша ергә тапшырылған ғәжәйеп фотоһүрәттәр тураһында хәбәр булғайны. Фотообъектив космик киңлектә аҙашып йөрөгән ҡала кадрын тотоп алған. Әйтерһең дә, был ҡала үҙаллы сәйәхәткә сыҡҡан. Мираждар, фантом картиналар билдәле, ләкин улар ерҙә бара. Ә бында - асыҡ космос. Картина шул тиклем ысынбарлыҡҡа тап килә. Бөтә билдәләре буйынса ла космоста аҙашып йөрөүсе ҡала (дөрөҫөрәге, уның бер өлөшө) - күренеп тора, ер сығанаҡлы. Ул нисек Ҡояш системаһының бер мөйөшөнә барып сыҡҡан һуң? Ғалимдарҙың был һорауға яуабы юҡ. Бындай ҡала пейзаждарын күреүселәр байтаҡ булған. Бер ваҡыт мин үҙем шундай миражға шаһит булдым. Был 1981 йылдың йәйендә Ямал ярымутрауының Каменный Мыс ҡасабаһында булды. Беҙҙең МИ-6 вертолетыбыҙ яғыулыҡ тултырыу өсөн ергә ултырҙы. Көн төньяҡ өсөн һирәк кенә була торғанса эҫе ине. Һауа торошо аяҙ, елһеҙ. Урында йәшәүселәр беҙгә көн һайын ҡабатланып тороусы мираждцы күрһәттеләр. Ысынлап та, һауала ҡаланың бер өлөшө күренә ине. Бейек өйҙәр, автомобиль тулы урамдар, йәйәүлеләр ағымы. Майҙанда ҡулын алға һуҙып торған ир-ат һәйкәле. Ййлап был күренеш иреп юҡҡа сыҡты..."

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА,**
**Бөрйән районының**
**"Таң" гәзите хәбәрсеһе.**



1.1



Ҙурайтылған варианттар. 2.1

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Егерме беренсе көн

**Һеҙҙең ял көнө! "Мега тормош" һөҙөмтәләренән ҡәнәғәтлек алығыҙ.**

Лайыҡлы ҡотлауҙар ҡабул итегеҙ! "Мега тормош"тоң 21-се көнө лә килеп етте, һәм һеҙ шатлыҡ, ныҡлы сәләмәтлек, яҡындарығыҙ һәм яңығыҙҙағылар менән бәхетле мөнәсәбәттә, дәртләнеп, уңыш һәм ҡәнәғәтләнеү менән тулы гүзәл тормошҡа алтын маршруттың яртыһынан күберәген үттегеҙ инде. Үҙегеҙҙең нимәгә һәләтле икәнегеҙҙе һәм хыялығыҙҙы ысынбарлыҡ итерҙәй мөмкинлегегеҙ барлығын үҙ-үҙегеҙгә иҫбат иттегеҙ. 21 көнлөк программаны үтәп, һеҙ шәхесте революцион үҙгәртеп ҡороу талаптарын оҙаҡ ҡына ваҡыт үтәп барырға ихтыяр көсө һәм характеры еткән аҙсылыҡ араһында булып сыҡтығыҙ.

"Мега тормош" программаһын үтәгән өс аҙна буйына тормошоғоҙҙоң һәр өлкәһендә ҡырҡа үҙгәрештәр булды. Үҙегеҙҙең эске донъяғыҙҙың бөтә яҡтарын иғтибар менән ҡарап сыҡтығыҙ һәм үҙегеҙгә оҡшап бөтмәгән нәмәләрҙе үҙгәртеү өсөн ыңғай аҙымдар яһанығыҙ. Үҙегеҙгә бик ҙур уңыштар алып килерлек саралар күрҙегеҙ. Был донъяға үҙ өлөшөгөҙҙө индерерҙәй яңы идеялар, яңы ғәҙәттәрегеҙ тамырлана башланы. Күҫәгеҙ ныгынды, үҙ-үҙегеҙгә ышанысығыҙ һәм тормошҡа сәмегеҙ артты. Ҡыҫҡаһы, һеҙ яңы тормош алып бараһығыҙ.

Программаның был өлөшөнә килеп етеү өсөн һеҙ байтаҡ эшләнегеҙ. Был енел булманы, нимәнәндер баш тартырға ла тура килде, әммә һеҙ тап ошо урынға килеп еттегеҙ һәм үҙегеҙҙе бик шәп итеп күрһәттегеҙ.

Бөгөн һеҙҙең ял көнө. Ниндәйҙер ҡыҙыҡ, көлкөлө нәмә эшләгеҙ йә берәй иҫәрлек ҡылығыҙ. Бер көнгә ҡыҙыҡһыныусан, энтузиазм менән тулы бала булып тороғоҙ. Диңгеҙ йә йылға яры буйлап йөрөгөҙ йәки элек ҡарамайынса ҡалдырылған спектакль ҡарарға театрға барығыҙ. Ләкин лайыҡлы ялығыҙ шатлыҡтарына күмелер алдынан "Мега тормош" программаһының һеҙгә ни тиклем тап килеүен аңларға һәм хәҙер үҙегеҙҙе ниндәйҙер маҡсаттарға туплайға мөмкинлек биреүсе баһалама таблицаны тултырығыҙ.

**"Мега тормош"то баһалау**

Билдәләрҙе "Яҡшы", "Бик яҡшы", "Шәп", "Үтә шәп" тип ҡуйығыҙ:

Аҡылды күнектереү
Физик күнекмә
Характерҙы нығытыу
Мотивация кимәле
Бәхетегеҙ рейтингы

**Робин ШАРМА.**



## 2 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.05 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы". Ток-шоу (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Оттепель". Драматический сериал (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Познер" (16+).
01.10 "Животное". Комедия (16+).
02.35, 03.05 "Семейные грехи". Мелодрама (16+).
03.00 Новости.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "1000 мелочей".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00 "Семейные обстоятельства". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10, 19.40 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Тайны следствия". Сериал (12+)
18.30 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Бомба". Историко-драматический сериал (12+).
23.40 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
00.40 "Девчата". (16+).
01.20 "Хулиганы-2". Криминальная драма (16+).
02.55 "Закон и порядок-18". Сериал (16+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Гүзәл Диникеева (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". "Әбдрәхим Исҡужин" (6+)
18.00 "Урал моно - 2012" (6+)
